✓ ***Бер аҡыл эйәһенән: "Хатта түҙеп торғоһоҙ бәхетһеҙлек ябырылғанда ла, һин тыныс ҡалаһың, өҙгөләнмәйһең, сәс йолҡмайһың. Ниңә?" - тип һорағандар. Аҡыл эйәһе шулай тип яуап биргән:"Оло бәхетһеҙлектәр килә лә китә, ә бәләкәйерәктәре иғтибарға лайыҡ түгел. Шулай булғас, ниңә ғазапланырға һәм үҙ-үҙеңде бөтөрөргә һуң?.."***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

28 ҒИНУАР - 3 ФЕВРАЛЬ (ҺЫУЫҒАЙ - ШАҠАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№4 (474)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Өфөбеҙҙең йөҙөн...**

ситтәр ҙә таныһын, әйҙә



4

**Башҡортса биҙәйек өйөбеҙҙө...**

үҙ асылыбыҙҙа булыу өсөн



6-7

**Алға табан атланмаған аҙым...**

артҡа табан баҫҡан аҙым ул



8-9

**Бейеүҙәрҙә - халыҡ фәлсәфәһе,**

халыҡ күңеленең матурлығы



10

14 **ТВ-программа**


*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Ни өсөн бер-ике кеше ауыҙынан сыҡҡан хәбәр тиҙ таралыусан, ә меңдәр хәҡиҡәте ишетелмәй?

***Спартак ИЛЬЯСОВ, Учалы районы Аҡһаҡалдар ҡоро рәйесе, яҙыусы:*** Яуапты һорауҙың икенсе өлөшөнән башлайыҡ: меңдәрҙең хәҡиҡәте - ул хәҡиҡәт булараҡ, һәр кеше аңында йәшәй, һәр кем өсөн билдәле, шуның өсөн дә ул - хәҡиҡәт. Ә бер-ике кеше ауыҙынан сыҡҡан хәбәр, башҡаларға билдәле булмау сәбәпле, яңылыҡ һымаҡ ҡабул ителә. Шул уҡ ваҡытта бындай хәбәрҙең ялған йәки бысраҡ ғәйбәт булыуы ла бик ихтимал. Ошо сүрәттә иһә ул тағы ла киңерәк тарала, сөнки тәбиғәт ҡанундары буйынса бысраҡ таҙаға тиҙ йәбешеүсән...

***Фәрит ВӘХИТОВ, Республика Хәрби дан музейының ғилми хеҙмәткәре:*** Ғәҙәттә, теге йәки был хәбәр телдән-телгә күсеп, үҙ-ара һөйләшкәндә, аралашҡан ваҡытта күңелгә тиҙерәк инә, ныҒыраҡ хәтерҙә ҡала, шуға ла беҙ ундай хәбәрҙәрҙе ғүмеребеҙ буйы ишетеп килгән хәҡиҡәт рәүешендә тәбиғи ҡабул итәбеҙ. Әгәр шунда бер ялғансы беҙ белгән, хатта инанған хәҡиҡәткә ҡапма-ҡаршы берәй фекер әйтә икән, ул инде сенсация булып ишетелә. Ул ауыҙҙан-ауыҙға күсеп, тиҙ генә таралып та китә. Шуға күрә мин хәҡиҡәтте ялғандан айыра белергә кәрәк, тигән фекерҙәмен. Мәҫәлән, яңыраҡ Үҙәк матбуғатта шундай мәғлүмәткә тап булдым. Белоруссияның Брест ҡалаһында йәшәүсе бер тарихсы, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында беҙҙең шунсама мең берәмек самолет булған да, имеш, шуның 90 проценты самаһын фашистар ҡыйратҡан, тигән хәбәр таратып ята. Шундай юҡ-барҙы, төптө ялған яла яғыуҙарҙы хәҙер күп ишетергә тура килә, үкенескә күрә. Был тиктәҫтән түгел, әлбиттә. Ошолай сенсация рәүешендәге хәбәр таратып, беҙҙең аңды шаңҡытырға тырышалар. Беҙҙең хәҡиҡәтте тарҡата торған сенсацияларҙы күп тараттылар инде, хатта ҡайһы саҡ үҙенден дөрөҫлөгөнә шик тә уятып ҡуя ундай бысраҡ хәбәрҙәр. Жуков, Конев кеүек бөйөк полководецтарҙың шәхесенән кәмселектәр эҙләү, уларҙың Бөйөк Еңеүгә индергән өлөшөн кәметергә тырышыуҙар ҙа булды бит инде. Ҡот оҫҡос язалауҙарға дусар ителгәндән һуң аҫып үлтерелгән партизан ҡыҙ Зоя Космодемьянскаяны, ауыл кешеләренең өйҙәренә ут төртөп йөрөгәне өсөн язаланған, имеш, тип таратып, батырҙан бахыр яһарға маташыуҙар ҙа шул уҡ героик үткәнебеҙҙе, бөйөк тарихыбыҙҙы юҡҡа сығарыуға иҫәпләнгән арзан ғәйбәт кенә булды, тип әйтер инем. Тап шундай тупаҫ яла, хәҡиҡәттең киреһе ҡолаҡҡа бик тиҙ эләгеүсән шул...

***Лира ЯҠШЫБАЕВА, яҙыусы:*** Был һорауға кем нисек ҡарай торғандыр, ә мин үҙем ғүмерем буйы уҡытыусы булып эшләгән кеше булараҡ яуаплар инем. Ғәҙәттә, бер үк нәмәне күп тылҡыһаң, ҡат-ҡат һөйләһәң, бала һине ишетмәй, әйткәнеңде бөтөнләй ҡабул итмәй башлай, йәғни ул тамам минһрәүләнә. Ниндәйҙер ысулын табып, бер, ләкин берәгәйле итеп әйтеүҙең иһә мәңгегә иҫтә ҡалыуы ихтимал. Бер-ике кешенең ауыҙынан сыҡҡан хәбәр тигәнегеҙ минә "йүкә телефонын" хәтерләтте. "Йүкә телефон" тип халыҡта, үҙегеҙ белеүегеҙсә, юҡ-бар хәбәргә ҡарата әйтәләр. Бындай хәбәр, ысынлап та, бик тиҙ тарала, сөнки ҡайһы берәүҙәр унда ниндәйҙер "ҡыҙыҡ" таба. Унан һуң кешегә берәй фекерҙе йә хәбәрҙе көсләп тағыуға ҡарағанда, ирекле мәғлүмәттең тиҙ таралыуы ла билдәле. Мәшһүр аҡыл эйәләре - әүлиәләр тормошон өйрәнгән кеше булараҡ, тағы шуны әйтә алам: уларҙың төплө, тапҡыр, аҡыллы һүҙҙәре халыҡ араһында бик тиҙ таралған бит. Тимәк, ундай һүҙ аҡылдарҙы, аңдарҙы тетрәтерлек кимәлдә ҡеүәтле лә, зиһендәрҙе йәшнәтерлек үткер ҙә, йәндәрҙе иретерлек шифалы ла булған, тип уйлайым. Хәҙер бына ошондай аҡыл таратыусылар түгел, ә дошманлыҡ уты тоҡандырыусы, тормошто ла, шәхесте лә ҡараға буяусы хәбәр таратыусылар күбәйгән заман. Шуға ла "Аҡты ҡаранан айырырға өйрәнәйек һәм өйрәтәйек" тигән халҡыбыҙ аҡылын тағы ла лозунг итеп күтәрергә ҡала.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*



# ХАЛЫҠ-АРА КОНКУРСТА...

## "Урал"ды яңғыратты егетебеҙ

**Күмертауҙағы 3-сө Башҡорт гимназияһының 9-сы синыф уҡыусыһы Илнур Рамаҙанов яңыраҡ Сочиҙа үткән "Европа өмөттәре" Халыҡ-ара конкурсында Гран-приға лайыҡ булып ҡайтты.**

Дүрт йәштән әсәһе Йәмилә апай етәкләгән "Аҡбуҙат" ансамблендә шөғөлләнә башлаған Илнур Сочиға тиклем әллә күпме конкурстарҙың еңеүсеһе була. Ике меңдән ашыу кеше көс һынашҡан был ярышҡа, мәҫәлән, ул "Алтын сапсан" Бөтөн Рәсәй балалар һәм үҫмерҙәр ижады фестивалендәге һөҙөмтәле сығышы өсөн саҡырылған. "Европа өмөттәре" бәйгеһендә конкурсанттар йәш буйынса бер нисә төркөмгә бүленеп ҡатнаша. Илнур Рамаҙанов 13-15 йәштәгеләр төркөмөндә халыҡ йыры "Урал"ды, шулай уҡ эстрада вокалында башҡорт, рус, инглиз телдәрендә йырҙар башҡара. Һәр йырын бейеү менән дә биҙәп, байытып ебәрә. Әйткәндәй, был конкурста һынауҙар ҡаты ғына була, беренсе турҙа микрофонһыҙ, фонограммаһыҙ тәбиғи тауыш менән йырлап сығыш яһарға тура килә. Гала концертта Төмән, Сочи, Ырымбур, Мәскәү, Израиль, Санкт-Петербург, Италиянан килгән абруйлы баһалама ағзалары еңеүсене билдәләй ҙә инде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Яҡташыбыҙ тағы әллә күпме бәйгеләрҙә Башҡортостан һәм Рәсәй исемен яңғыратыр әле, тип ышанабыҙ. Һәләтле кеше һәр яҡтан һәләтле була инде, былтыр баян класы буйынса музыка мәктәбен тамамлаған, уға хатта Мәскәү консерваторияһына уҡырға барырға ла тәҡдим иткәндәр. Шулай ҙа Илнур Рамаҙанов киләсәктә йырҙы үҙенең төп шөғөлө итеп һайларға теләмәй, ә ысын ир-егеттәргә генә хас етдиерәк һөнәргә уҡырға уйлай.**

**Айгөл ХАЛИҠОВА.**

✓ *Февраль айында гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакциябыҙға ебәргән ике уҡыусыбыҙ башҡортса "Ҡөрьән-Кәрим" китабына эйә буласаҡ. Бәхетегеҙҙе һынап ҡарағыҙ ҡана!*



*САҢ ҠАҒАБЫҘ!*



# ХАЛЫҠ ГӘЗИТ УҠЫМАЙ...

## Сәбәбе - почта хеҙмәткәрендәме?

**Туған телебеҙҙә сыҡҡан һәр баҫманың тәғәйен үҙ йүнәлеше, үҙ йөҙө һәм уҡыусыһы бар. Был йәһәттән уҡыусының һайлап алыу мөмкинлеге ҙур булыуы ҡыуандыра. Шуға ҡарамаҫтан, берәүгә лә сер түгел, халыҡ гәзит-журналдарға яҙылыу буйынса әллә ни әүҙемлек күрһәтмәй. Быны сәбәбен Интернет селтәренең тормошта киң урын алыуы, уҡымайынса тора алмаған быуынға алмашҡа ташҡа баҫылғанды әллә ни һанламаған йәштәр килеүе, мәғлүмәт сараларының күп һәм төрлө булыуы менән дә аңлатырға тырышалар. Гәзит-журналдарға һүлпән яҙылыуҙың ысын сәбәбе нимәлә һуң?**

Ғинуар каникулдары тамамланыу менән, һәр йылдағыса, Белорет районының "Урал" гәзите редакцияһына борсоулы шылтыратыуҙар йышая. Һәр шылтыратыусы яҙылған баҫмаһын һаман ала алмауына йә уны һуңлатып килтереүҙәренә зарлана. Был зарҙарҙың сәбәбен асыҡлау маҡсатында беҙгә, "Урал" гәзите хәбәрселәренә, уҡыусылар, почта хеҙмәткәрҙәре менән осрашырға, мәсьәләне асыҡлауҙы һорап етәкселәргә хаттар яҙырға һәм ике яҡтың да дәғүәһен тыңларға тура килә. Аралашыуҙар барышында шуныһы асыҡлана: гәзит-журнал алдырыусыларҙың күбеһе почта хеҙмәтенең эше менән ҡәнәғәт түгел. Бына ошо ризаһыҙлыҡ тираждың ҡырҡа кәмеүенә, уҡыусылар ышанысының юғалыуына килтергән төп сәбәптәрҙең береһелер, тигән ҡарарға киленә.

Эйе, мәсьәләне бер яҡтан ғына ҡарағанда был нәҡ шулай кеүек. Ләкин почта хеҙмәткәрҙәре быны икенсе төрлөрәк аңлата. Хеҙмәтләндергән участканың ҙур булыуы, почтальондар етешмәүе, уларҙың йыш алышынып тороуы, эш хаҡының түбән, ә хеҙмәт шарттарының иһә насар булыуы ҡушылған эште еренә еткереп башҡарыуға ҡамасаулыҡ тыуҙыра, ти улар.

Һүҙ ҙә юҡ, һәр кемдең хәләл аҡсаһын биреп яҙылған гәзит-журналын ваҡытында алып уҡығыһы килә. Тик нилектән элек-электән һәр өйҙә көтөп алынған почта таратыусыларға ышаныс кәмегән? Дөрөҫ, почта хеҙмәте ҙур яуаплылыҡ һәм тырышлыҡ талап иткән эштәрҙең береһе. Бәләкәй генә эш хаҡына ямғыр, ҡар-бурана ҡарамай, иңдәренә 15-әр килограмлыҡ сумка аҫып, өйҙән-өйгә йөрөгән почтальондың хеҙмәте бары тик маҡтауға ғына лайыҡ. Тик проблемаһыҙ бер өлкә лә булмаған кеүек, районды был тармағында ла хәл итәһе мәсьәләләр етерлек. Былтыр республикала почтальондарҙың хеҙмәтен саҡ ҡына булһа ла еңеләйтеү маҡсатында велосипедтар һатып алынды. Тик шуныһы: ауыл ерендә яҙын, көҙөн юлдың бысраҡ, ҡышын буран булыуын, айырым участкаларға ҡараған ауылдарҙың бер-береһенән алыҫ урынлашыуын һәм иң мөһиме - бүленгән транспорт сараһының бөтә районға 2-3-әү генә эләгеүен иҫәпкә алһаң, велосипедтар ғына проблеманы хәл итеү сараһы була алмай икәне көн кеүек асыҡ. Мәҫәлән, Белорет районы Егәҙе почта бүлексәһенә 5 участка: Ботай, Һаралы, Өмөтбай, Баҡый ауылдары ҡарай. Өмөтбай менән Егәҙе араһы - 18, Баҡыйға 25 саҡрым, ә Һаралы ауылына ваҡытында почта алып барыу өсөн бер яҡҡа ғына 34 саҡрым юл үтергә кәрәк. Шулай итеп, 5 мең эш хаҡы алыу өсөн почтальонға әллә күпме юл үтеп, киске 10-11-ҙә генә өйгә ҡайтып инергә тура килә. Юлда бүреләр осрауы ла ҙур хәүеф тыуҙыра. Бында инде велосипедҡа ғына өмөт итеп ултырып булмай.

Инйәр участкаһында эшләүсе почтальонға ла әллә күпме саҡрымдарҙы йәйәүләп үтергә тура килә. Ноҡатта йәшәүсе почтальон ауылдаштарын һәм Айыс, Арышпар ауылдарын хеҙмәтләндерә. Ваҡытында почта таратыу өсөн уға еңел булмаған шундай маршрут үтергә тура килә: Ноҡат - Инйәр (20 саҡрым ) - Айыс (45 саҡрым) - Арышпар (15 саҡрым) - Ноҡат (10 саҡрым). Ә инде участканы әйләнеп сығыу өсөн 90 саҡрымды нисегерәк үтеү ике ставкаға эшләп, 7 мең һум аҡса алған почтальондың проблемаһы.

Дәғүәләрҙе тыңлағандан һуң, ике яҡтың да үҙенсә хаҡлы булыуын күрәһең. Хәүефле һәм алыҫ саҡрымдар үтеп, һәр өйгә шатлыҡлы хәбәрҙәр, республика, ил яңылыҡтарын ташыған почтальондың хеҙмәт хаҡы ни өсөн аҙ һуң? Әллә күпме сығымдар талап иткән велосипедтар алғансы, почтальондарҙың эш хаҡын саҡ ҡына булһа ла арттырһалар, яҡшыраҡ булмаҫ инеме? Белорет РУФПС-ы начальнигы В.Н.Егупов был мәсьәләне шулайыраҡ аңлата:

- Хеҙмәт хаҡы башҡарылған эшкә ҡарап ҡына түләнә, тырышмаһаң, бер кем дә артыҡ аҡсаһын сығарып һалмаясаҡ. Үткән йылда почтальондарҙы ҡыҫҡартыу иҫәбенә уларға эш хаҡы өҫтәнеләр. Ошо нигеҙҙә хеҙмәт хаҡы артһа ла, ҡыҫҡартыуға эләккәндәрҙең эше ҡалғандарға бүлеп бирелгәнлектән, хеҙмәтләндергән участка ла ҙурайҙы. Күптәр быңдай шарттарҙа эшләргә ризалаша һалып бармай. Шул сәбәпле, почтальондар етешмәй, эшләгәндәре лә тиҙерәк китеү яғын ҡарай. Һүҙ ҙә юҡ, эш ауыр, ләкин һәр эштең үҙ ҡыйынлығы бар. Почтальондарҙың эш хаҡы ла туранан-тура халыҡ менән эшләй белеүгә ҡағыла. Шуға күрә, яҡшыраҡ хаҡ алыу өсөн ҙур ғына тырышлыҡ һалыу талап ителә. Былтыр ғинуарҙа почтальондарға - 18, апрелдә 13 процент эш хаҡы өҫтәлде. Миҫалға Инйәр зонаһын алайыҡ, унда I класлы почтальондың эш хаҡы - 4473 һум, II класлы почтальон - 4349, III класлы почтальон 4224 һум тәшкил итә. Бынан тыш, ошоға өҫтәп, гәзит-журналдарға яҙҙырған өсөн 1,5, коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәр ҡабул итеүҙән - 0,5 , тауар һатыуҙан - 15, икенсе почтальонды алыштырған өсөн 100 процент өҫтәп түләнә. Тырышһаң, ярайһы ғына сумма килеп сыға. Почта булмаған көндәрҙә почтальондар мәнфәғәтенән сығып көн һайын эшкә килеүҙе талап итмәйбеҙ, шунлыҡтан улар эшкә лә көн аша ғына йөрөй. Ошоларҙың барыһын да иҫәпкә алһаң, әллә ни зарланырлыҡ урын да ҡалмай...

Һәр яҡтың үҙ фекере, үҙ дәлиле. Ләкин, күрһәтелгән хеҙмәттән халыҡ риза түгел, кемдәрҙер зыян күрә икән, тимәк, бында уйланырлыҡ урын, хәл итәһе мәсьәләләр бар, тигән уй тыуа. Үрҙә килтерелгән факттарҙан сығып фекер йөрөткәндә, шуныһы асыҡ: республикала иң ҙур районларҙың береһе, 30 мең самаһы башҡорт йәшәгән Белорет районында гәзит-журналдарға яҙылыуҙың насар ойошторолоуы баҫмаларҙың йөкмәткеһе насар, үҙ уҡыусыһы юҡ, тигәнде аңлатмай әле. Халыҡҡа рухи байлыҡ өләшеү, йөкмәткене уҡымлы итеү һәм ташҡа баҫылғандың баһаһын төшөрмәй, уны ваҡытында уҡыусыға еткереү өсөн почта хеҙмәткәрҙәренә лә берҙәй көс һалырға кәрәк. Быны өсөн, ысынлап та, уларҙың эшен тамырынан үҙгәртергә, уларға эш шарттары тыуҙырырға кәрәк. Был хаҡта саң ҡағырға ваҡыт еткәндер, моғайын.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**
**Белорет ҡалаһы.**

*ИҒТИБАР!*

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



Гәзитебеҙҙе йыл да алдырған, уға ваҡытында яҙылған, уны аҙна һайын ҡәҙерле ҡунағылай көтөп алған тоғро уҡыусыларыбыҙ барлығын беләбеҙ һәм улар иғтибарына шуны еткерәбеҙ: февраль-март айҙарында 2012 йылдың тәүге яртыһындағы хаҡ менән **(348 һум 24 тин)** 2012 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып буласаҡ. **Һеҙҙе бер аҙ дәртләндереү өсөн шундай тәҡдим: февраль айында гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакциябыҙға ебәргән ике уҡыусыбыҙ башҡортса "Ҡөрьән-Кәрим" китабына эйә буласаҡ.** Бәхетегеҙҙе һынап ҡарағыҙ ҡана!

**Һәм тағы.** Эргә-тирәгеҙҙә, таныш-тоноштарығыҙ араһында теге йәки был сәбәп арҡаһында гәзиткә яҙылып өлгөрмәй ҡалғандар ҙа барҙыр. Уларҙы иҫкәртегеҙсе: 17 февралгә тиклем яҙылһалар, марттан өйҙәренә тағы килә башлар "Киске Өфө". Индексы - 50665. Дүрт айға яҙылыу хаҡы - 232 һум 16 тин.

**Әйткәндәй,** почталар менән гәзиткә яҙҙырыу һәм гәзитте өйҙәргә килтереү буйынса аңлашылмаусылыҡтар килеп тыуһа, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итергә онотмағыҙ.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рәсәйҙең иң яҡшы ун лоббисы - төбәк лидеры исемлегендә Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитовтың рейтингы ышаныслы күтәрелә бара. Төбәк башлыҡтары исемлегендә "Ғәйәт ҙур һөҙөмтәлелек" номинацияһында Рөстәм Хәмитов етенсе урын биләй. 2011 йылдың ноябрендә Башҡортостан Президенты рейтингы 4,06 балл менән баһаланһа, декабрҙә был күрһәткес 4,10 балл тәшкил итте.

✓БР Президенты Рөстәм Хәмитов указы менән Рәмил Исҡужин республиканың ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры итеп тәғәйенләнде. Рәмил Кәбир улы Исҡужин 2006-2008 йылдарҙа Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышының Федерация Советы ағзаһы, 2007-2011 йылдарҙа Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Йыйылышының бишенсе саҡырылыш Дәүләт Думаһы депутаты булды.

✓Башҡортостанда "Һылыуҡай-2012" республика телевизион конкурсында ҡатнашыу өсөн ғаризалар ҡабул итеү башланды. Унда ҡала һәм район конкурстарында еңеүсе 16-22 йәштәрҙәге һылыуҙар ҡатнаша ала, уларға башҡорт телен, халыҡтың ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын белеү мотлаҡ. Конкурстың һайлап алыу туры 1 февралдә Өфөлә, "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы бинаһында үтәсәк. Ғаризалар 30 ғинуарға тиклем ҡабул ителә. Телефон: 8 (347) 289-62-00, 289-65-50.

✓Башҡортостандың Контроль-иҫәп палатаһы коллегияһы ултырышында хәбәр итеүҙәренсә, һуңғы мәғлүмәттәр буйынса республикала торлаҡтары булмаған 4100-ҙән ашыу ата-әсә ҡарауынан мәхрүм булған һәм етем бала иҫәпләнә. Уларҙан яҡынса 1300 кеше торлаҡ алыу хоҡуғына эйә. Етем балаларҙы торлаҡ менән тәьмин итеү өсөн 2010 йылда бюджеттан 133 миллион һумдан ашыу аҡса бүленһә, үткән йылда был сумма 370 миллион һумдан ашыу тәшкил итте. 2012 йылда иһә финанслау күләме 400 миллион һум тәшкил итәсәк.

✓Ошо арала бөтә донъя селтәренең Рәсәй сегментында россиябездураков.рф интернет-порталы эшләй башланы. Ул Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев тәҡдиме менән "Оло хөкүмәт" проекты сиктәрендә барлыҡҡа килгән. Теләге булған һәр кем унда "ахмаҡлыҡтар" менән уртаҡлаша ала. Ресурсты булдырыусылар фекеренсә, портал көләү һәм зарланыу өсөн түгел, ә Рәсәй йәмғиәтенең етди проблемаларын хәл итеү өсөн реаль ҡорал булараҡ ойошторолған.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ХӘҠИҠӘТ ЙӘН ҺАҠЛАР...

**Үткән һанда интихар (суицид) хаҡында һүҙ алып барҙыҡ. Ислам дине буйынса үҙ-үҙенә ҡул һалыусы иң оло гонаһ ҡылыусы ла. Шуға күрә ундайҙарҙы башҡа мөъминдәр ятҡан зыяратҡа күмеүҙе лә тыйғандар. Күп осраҡта был юлға барыусы йәшәүҙең мәғәнәһен аңламай, үҙенә Хоҙай бер генә тапҡыр биргән ғүмерен һанламай. Ундайҙарҙың маҡсаты ла булмай. Маҡсат, тигәндән, тормоштоң йөкмәткеһен, йәшәүҙең мәғәнәһен фәҡәт маҡсат билдәләй. Хәҡиҡәттең йән һаҡлар мәғәнәһен тормош маҡсаты юҫығында ҡарайыҡ.**



## Маҡсат - бер йотом һауа

Үҙ-үҙенә ҡул һалырға теләп, башын элмәккә тыҡҡан бер үҫмерҙе туғандары күреп ҡалып, элмәктән һалдырып ала. Артабан уны туғандары нисек кенә йыуатырға, донъяның фанилығын, ғүмерҙең ғәзиз булыуын аңлатырға тырышмаһын, ул барыбер тәүге уйынан баш тартмай. Үҙенән күҙ яҙлыҡтырмай тороусы туғандарының диҡҡәте бушаған арала ул тағы ла үҙ-үҙенә ҡул һалырға була, уны тағы ла элмәгенән һалдырып өлгөрәләр. Һүҙ, өндәү, инәлеү, ялбарыу менән генә уның ғүмерен һаҡлау мөмкин түгеллеген тамам аңлаған туғандары, ахыр сиктә, уны алыҫ бер ауылдағы данлыҡлы муллаға өшкөртөргә алып баралар. Мулла алыҫ юлдан килеүселәрҙе яҡты йөҙ күрһәтеп ҡаршылай, уларҙың үтенесен диҡҡәт менән тыңлай. Мәсьәләне нисек бар, шулай тыныс ҡабул итеп, килеүселәрҙе һәүетемсә сәй табыны артына саҡырғас, туғандары дин әһеленең бындай ҡарашын битарафлыҡ билдәһе тип ҡабул итеп, шул арала күңел төшөнкөлөгөнә лә бирелеп өлгөрә. Ни тиһәң дә, мулла үҫмерҙе һис кенә лә өшкөрөргә йыйынмай.

Сәй эсеп бөткәс, йорт хужаһы килеүселәрҙе өйҙәрендә көтөп ултырырға ҡуша ла, теге үҫмерҙе, йөрөп киләйек, тип, йылға буйына алып китә. Эҫе йәйге көн була. Мулла ҡунағына һыу инеп сығырға тәҡдим итә. Йәш кеше уның тәҡдименә шатланып риза була. Сисенеп һыуға төшәләр. Йылғаның тәрән урынына барып еткәс, ҡунағының артынан йөҙөп килеп, мулла уны ҡапыл һыуға батыра. Батыра ла, ике минут самаһы һыу эсендә тотҡандан һуң ҡапыл өҫкә сығарып, бер генә тапҡыр тын алырға мөмкинлек бирә һәм киренән һыу төбөнә төшөрә. Башы ҡалҡҡан һайын үҫмергә: "Тағы ла аҫылынаһыңмы-юҡмы?" - тигән һорауҙар яуҙыра үҙе. Егет сираттағы мәртәбә башын ҡалҡытып: "Олатай... Алла... иҫеме... менән... ант... итәм... бүтән... улай... итмәм..." - тигән һүҙҙәрҙе һыу өҫтөнән башы күренгән һайын әйтеп, көс-хәл менән әйтеп бөтөрә.

Хәтһеҙ һыу йотоуҙан сәсәп хәле бөткән егетте яр ситенә сығарып һуҙып һалғас, мулла унан:

-Ә һыу аҫтында торғанда нимә хаҡында уйланың? - тип һорай.

-Тын алыу тураһында, - ти үҫмер көс-хәл менән.

-Нисек итеп тын алырға?

-Тәрән итеп...

-Ә икенсе тапҡыр һыу төбөнә төшкәс, нимә хаҡында уйланың һуң?

-Тағы ла бер тапҡыр ғына тын алырға...

-Ә өсөнсөгә?

-Һыу өҫтөнә бер генә секундҡа сығырға ла, бер генә йотом һауа һуларға ине, - тип яуап бирә үҫмер.

-Бына һин үҙеңде-үҙең үлтерергә итҡәндә, былар хаҡында уйламаныңмы ни? Унда ла һин бер генә секундҡа донъялыҡҡа ҡайтыуҙы, бер генә йотом һауа һулауҙы бәхеткә тиңләр инең бит, - тип һүҙен дауам итә мулла.

Әлбиттә, егет уның һүҙенә бер нимә тип тә яуап бирә алмай. Ә нимә тип яуап бирә алһын инде ул? Әгәр ҙә был һорауға яуап таба алһа, үҙ-үҙенә ҡул һалмаҫ ине бит инде. Ә мулла егеткә ошолай бер генә тапҡыр һыу ингән арала йәшәүҙең ҡәҙерен, мәғәнәһен аңларға өйрәтә. Һыу аҫтында саҡта бер генә йотом һауа һулауҙы ғүмерен һаҡларлыҡ маҡсат итеп күргән үҫмер хатта һулыш алыуҙың да донъялыҡта бәндәнең бәхете икәнен аңлай, йәнен һаҡлар хәҡиҡәтте бер йотом ғына һулышта күрә...

## Оҙон ғүмергә юл

Бер генә йотом һауа һулау йәшәүенең төп маҡсатына әүерелгәндә генә әҙәм балаһы ғүмерҙең, йәшәүҙең мәғәнәһен тулы камилдә аңлай аламы? Барлыҡ кешеләр ҙә бындай һынауҙы үтә башлаһа, йәшәүҙең мәғәнәһе үтә тарайыр ҙа ине. Тормошта маҡсаттарҙың башҡалары, ваҡтары, ололары бар, уларына бөтөнләй урын ҡалмаймы инде? Ваҡ маҡсаттар менән йәшәгәндәрҙе олоһонон ҡүләгәһе ҡамасаулай, үтеп булмаҫлыҡ кәртә булып тойола, ә инде оло маҡсаттар менән йәшәгәндәр өсөн ваҡтарының ауырлығы бөтөнләй тойолмай, тиҙәр. Шулайҙыр. Әйтәйек, бәрәү Мәскәүгә Ҡаҙан аша барырға йыйына икән, ти. Әгәр ҙә ул кеше был ҡалаларҙың икеһендә лә бер ваҡытта ла булмаһа, уның маҡсаты икеһен дә күреүгә ҡайтып ҡала бит инде. Был осраҡта уның оло маҡсаты Мәскәүҙе күреү булһа, Ҡаҙанды күреү юлыңғай ғына һуғылыу тип аталыр ине. Шуның кеүек, әгәр ҙә беҙ балаларыбыҙҙы үҙебеҙҙең рухта тәрбиәләргә теләһәк, быға ирешеү өсөн барынын да эшләйбеҙ һәм ошо маҡсаттағы барлыҡ ғәмәлдәребеҙҙе (баланы үҙ телебеҙҙә тәрбиә алып барылған баҡсаға йөрөтөү, милли мәктәптә уҡытыу, сәнғәтебеҙгә, мәҙәниәтебеҙгә, әҙәбиәтебеҙгә ылыҡтырыу, үҙ милләттәше менән ғаилә ҡороуына булышлыҡ итеү, һ.б.) маҡсат тип атай алмайбыҙ бит. Былары инде ошо оло маҡсатҡа ынтылыуҙағы юлдар, ысулдар ғына булып ҡала. Беҙ уларҙы икенсе төрлө итеп "ваҡ маҡсаттар" тип тә атай алабыҙ. Машинист ярҙамсыһы булырға хыялланған кешенең был маҡсатына өлгәшә алмауы ла бар, шул уҡ ваҡытта машинист булырға хыялланған кеше еңел генә машинист ярҙамсыһы була ала. Һикһән йыл ғүмер йәшәргә ниәтләнгән кешенең йөҙ йыл йәшәре икеле, ә инде йөҙ йәшкә етергә ниәт иткәне уйламай ҙа һикһәнен тултыра. Тимәк, оло маҡсат ҡуйыу йәшәүҙең мәғәнәһен барлыҡҡа килтерә һәм ошо хәҡиҡәт кешенең йәнен һаҡлар ысулға әүерелә. Йән һаҡлар хәҡиҡәттең береһен, шулай итеп, маҡсат тип атайыҡ инде.

Маҡсаттарға өлгәшеү юлдары ла төрлөсә. Мөғжизәгә, маҡсатыңдың уңышлы булырына ышаныу яҡшы, әммә "Үҙ-үҙенә ышанмаған кеше генә мөғжизәгә, уңышҡа ышана" тигән аңлау ҙа бар. Был йәһәттән мөғжизәнең көтқән ергә килмәҫен дә, килгән хәлдә лә уның көтөүсе тарафынан мөғжизә итеп ҡабул ителмәҫен аңларға кәрәктер. Мөғжизә юлда, дөрөҫөрәге, Аллаһы Тәғәләгә табан барған юлда тыуа...

Юғарыла килтерелгән фекер йүнәлештәренән сығып йәшәүҙең, ғүмерҙең төп маҡсатын билдәләп ҡарайыҡ. Ҡайһы берәүҙәр "Тыуымдан ҡалмағас, үлемдән ҡалып булмай инде ул" тип йәшәүҙең мәғәнәһен үтә ябайлаштырып ҡарай. Ни өсөн тигәндә, был осраҡта йәшәүҙең төп маҡсаты үлемгә ҡайтып ҡалған кеүек. Кеше үлер өсөн йәшәмәй, ә йәшәр өсөн тыуа. Тау артында ниҙәр бар, тигән һымаҡ, үлемдең арьяғында ниҙәр бар һуң? "Теге донъя" тигәндәре ниндәйерәк урын һуң, ғөмүмән, бармы һуң ул донъя? Ни өсөн тигәндә, фанилыҡ менән баҡыйлыҡ араһында бер яҡлы ғына хәрәкәт: "теге донъяға" үтеп була, тик был яҡҡа ғына юлдар ябыҡ. Америка философы һәм психологы Майкл Ньютондың "Йән сәйәхәте" тигән китабын уҡығандан һуң "был яҡҡа юлдар ябыҡ" тигән фекерҙең ысынбарлыҡҡа тап килеп бөтмәүен дә аңланым. Был турала алдағы һанда һөйләшербеҙ.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**(Дауамы бар.**

**Башы 2-3-сө һандарҙа).**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге Берлинда "Йәшел аҙна-2012" күргәҙмәһендә үҙенең 150 төрҙән ашыу продукцияһын тәҡдим итте. Был башҡорт балы, төрлө дауалау-профилактика һәм аҙыҡ-түлек продукттары. Башҡортостан исеменән күргәҙмәлә "Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге" дәүләт учреждениеһы һәм "Башспирт" асыҡ акционерҙар йәмғиәте сығыш яһай.

✓Башҡортостандың "Тәбиғәт" дәүләт унитар предприятиеһы республика халҡының бихисап һорауҙары буйынса утилләштереү өсөн тәҙәк булмаған компьютерҙарҙы бушлай ҡабул итә башланы. Берҙән-бер шарт: һәр кеше бер килгәндә компьютер ҡорамалының бер комплектын ғына тапшыра ала. Халыҡтан иҫке оргтехника Өфө, Степан Кувыкин урамы, 102 адресы буйынса ҡабул ителә. Эш ваҡыты: сәғәт 9-ҙан 18-гә тиклем.

✓"Оҙайлы эш стажына эйә хеҙмәт ветераны" исемен алыу өсөн республиканың социаль яҡлау органдарына бөгөнгө көндә Башҡортостандың 47 мең кешеһе мөрәжәғәт иткән. Хәтерегеҙгә төшөрәйек, 2012 йылдың 1 ғинуарында "Һуғыш, хеҙмәт һәм Ҡораллы көстәр ветерандары тураһында"ғы Башҡортостан Республикаһы Законы үҙ көсөнә инде. Уға ярашлы, пенсия йәшенә (ир-егеттәр - 60 йәшкә, ҡатын-ҡыҙҙар - 55 йәшкә) етеп, хеҙмәт стажы 40 һәм 35 йылға тулһа, "Оҙайлы эш стажына эйә хеҙмәт ветераны" исемен алыу өсөн йәшәү урыны буйынса Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау идаралығына мөрәжәғәт итергә мөмкин.

✓26 ғинуарҙа сәғәт 11.00-ҙә Республика Хәрби Дан музейында 1812 йылғы Ватан һуғышында еңеүҙең 200 йыллығына арналған күргәҙмә асыла. Экспозиция ике ай эшләйәсәк, һуңынан ул республика ҡалаларында күрһәтеләсәк. Өфө ҡалаһы, Комаров урамы, 7-се йорт адресы буйынса музейға рәхим итегеҙ !

✓Өфөлә "Башҡортостандың баш ҡалаһы йыл уҡытыусыһы - 2012" XV ҡала һөнәри бәйгеһе старт алды. Был мәртәбәле конкурсҡа быйыл 44 уҡытыусы ҡатнашасаҡ, уның сиктәрендә туған тел һәм физкультура уҡытыусылары конкурсы айырым үтәсәк. Еңеүселәр 17 февралдә билдәләнәсәк.

✔ *Бер туҡтауһыҙ иҫкәртеп тороуға ҡарамаҫтан, граждандар шикле төҙөлөш компанияларына үҙ аҡсаларын тотороуҙы дауам итә, тине башлыҡ. Халыҡ был өлкәлә юридик яҡтан белемлерәк һәм уяуыраҡ булһын ине.*



## ЕТЕ РАЙОН

**Дим районы.** Башҡорт кавалерия дивизияһы музейында Дим районы башҡорттары ҡоролтайы ағзалары, райондың башҡорт теле уҡытыусылары һәм уҡыусылар "Аҡ тирмә" башҡорт мәҙәни клубы етәксеһе Ләлә Бейешева менән осраштылар. Осрашыуҙа ҡатнашыусылар Ләлә Ғибаҙулла ҡыҙын 80 йәшлек юбилейы менән ҡотланы, иҫтәлектәре менән уртаҡлашты, йыр-бейеү бүләк итте.

**Калинин районы.** 2009 йылдан районда "Баһалау" ("Признание") йәмәғәт эшлекле премияһы булдырыла. Ул райондың үҫешенә ҙур өлөш индергән, шулай уҡ матур идеяларын тәҡдим иткән кешеләргә бирелә. Әлеге ваҡытта, 30 ғинуарға тиклем, "Райондың байлығы", "Профессия - тормош", "Геройҙар беҙҙең арала", "Йәш һәләттәр" номинациялары буйынса дәғүәселәрҙән ғаризалар һәм анкеталар ҡабул ителә. Еңеүселәргә статуэтка, Диплом һәм махсус бүләк тапшырыласаҡ.

**Киров районы.** Белем алырға бер ҡасан да һуң түгел, тигән хәҡиҡәтте алға ҡуйып, Халыҡ университеты белем алырға теләге булған пенсионерҙарҙы бушлай курстарға саҡыра. Уларға компьютер, хоҡуҡ, медицина нигеҙҙәре өйрәтеләсәк, психология буйынса тренингтар, дауалау физкультураһы үткәреләсәк, башҡорт, инглиз, ғәрәп телдәре уҡытыласаҡ, бәйләү, баҡсасылыҡ буйынса дәрестәр биреләсәк.

**Ленин районы.** 2-се Башҡорт лицейында "Тормош стиле - ижадсылыҡ" йәштәр йәмәғәт инициативалары фестиваль-эстафетаһы үтте. Уның сиктәрендә ойошторолған беренсе асыҡ слет-семинарҙа мәктәп һәм урта һөнәрселек учреждениеларының 100-ҙән ашыу уҡыусыһы ҡатнашты. Программала уйын лекциялары, төрлө йүнәлеш буйынса оҫталыҡ дәрестәре, йәштәр һәм үҫмерҙәр йәмәғәт ойошмаларының лидерҙары менән матбуғат конференциялары һ.б. саралар уҙғарылды.

**Октябрь районы.** "Өлгөлө ихата", "Өлгөлө йорт", "Өлгөлө подъезд" ҡала конкурсында райондың ике йорто - Зеленогорск урамындағы 13-сө һәм Маршал Жуков урамындағы 2-се йорт иң яҡшылар иҫәбенә инеп, еңеү яуланы.

**Орджоникидзе районы.** 25 ғинуарҙан 31 ғинуарға тиклем "Биатлон" спорт-һауыҡтырыу комплексында 26 йәшкә тиклемге спортсылар араһында биатлон буйынса Рәсәй Кубогы һәм Рәсәй беренселеге үтә.

**Совет районы.** "Рәсәйҙең олимпиясыларына ярҙам фонды" мәрхәмәтлек фондының грантын яулаусы спорт мәктәптәре араһында райондың фехтование буйынса махсуслашҡан 19-сы Олимпия резервындағы балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәбе лә бар. Был белем усағы 1993 йылда асылған һәм төрлө чемпионаттарҙа еңеү яулаған спортсыларҙы тәрбиәләгән. Шулай ҙа мәктәптең ғорурлығы булып Афиналағы Олимпия уйындарының бронза призерҙары Руслан Насибуллин менән Реналь Ғәниев тора.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ӨФӨБӨҘҘӨҢ ЙӨҘӨН...

## ситтәр ҙә таныһын, әйҙә



**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов киң мәғлүмәт саралары һорауы буйынса тәүге матбуғат конференцияһын үткәрҙе. Яңы башлыҡ алдағы йылдарға билдәләнгән төп эш йүнәлештәре менән таныштырҙы, яҡын арала хәл итеүҙе талап иткән бурыстарҙы билдәләне.**

"Үҙ эшмәкәрлегемдә тәү сиратта ҡала граждандарының, халыҡтың фекеренә таянасаҡмын", - тип башлап китте һүҙен Ирек Ишмөхәмәт улы. Етәксе социологик һорау алыуҙарҙы күҙ уңында тотто. Уларҙың һөҙөмтәһе буйынса иң ҡатмарлы мәсьәләләрҙең береһе - халыҡты торлаҡ менән тәьмин итеү. Өфөләләрҙең 45 проценты, йәшәү шарттары ҡәнәғәтләнерлек түгел, тигән фекерҙә. Күптәр, хаҡы арзаныраҡ булған йорттар төҙөлһөн ине, тигән теләк белдерә. Ирек Ишмөхәмәт улы билдәләүенсә, баш ҡалала эконом-класс һаналған торлаҡ төҙөлөшө иғтибар үҙәгенә алынасаҡ. Шулай уҡ ҡала ситендә аҙ ҡатлы йорттар күтәреү өҫтөндә эш алып барыласаҡ. Үкенескә ҡаршы, хәлдәрҙең береһе - бер туҡтауһыҙ иҫкәртеп тороуға ҡарамаҫтан, граждандар шикле төҙөлөш компанияларына менән килешеү төҙөп, уларға үҙ аҡсаларын тотороуҙы дауам итә, тине башлыҡ. Халыҡ был өлкәлә юридик яҡтан белемлерәк һәм уяуыраҡ булһын ине, тигән теләк белдерҙе ул.

- Баш ҡалала юлдар мәсьәләһе ҡырҡыу булып ҡала килә. Ваҡытында юлдарҙы киңәйтеп, тығындарҙы күпкә кәметеүгә өлгәштек, әммә хәҙер транспорт хәрәкәте менән идара итеүгә иғтибар йүнәлтергә кәрәк, - тип дауам итте һүҙен баш ҡала башлығы. - Шулай уҡ яҡын арала бөтә светофорҙарға кире ваҡытты иҫәпләгән таймерҙар ҡуйыу күҙаллана. Улар водителдәр өсөн дә тәғәйенләнәсәк. Һары утты алып ташлау тәжрибәһен тормошҡа ашырып ҡарау уйы бар. Әйткәндәй, Европа светофорҙарында һары ут юҡ. Шуға күрә унда юлдан ашығып һәләкәткә осрау, башҡа бәхәсле хәлваҡиғалар күпкә кәмерәк. Өфө йылғаһы аша күпер үткәүеле төҙөү бурысы тора. Быны тормошҡа ашырыу өсөн федераль бюджеттан аҡса бүлеү мәсьәләһе яҡын арала хәл ителергә тейеш...

Социаль өлкәләге мөһим проблемаларҙың береһе булараҡ, балалар баҡсаларының етешмәүе тураһында ла һүҙ булды осрашыуҙа. Рәсми мәғлүмәттәргә ҡарағанда, баш ҡалала 24 мең бала сиратта тора. Әммә был һан дөрөҫлөккә тап килеп етмәй, тигән фекерҙә етәксе: "Күбеһе балаларын тыуғас та балалар баҡсаһына сиратҡа ҡуя, бынан тыш, ата-әсәләр бер юлы бер нисә балалар баҡсаһына сиратҡа яҙыла. Шуға күрә ысынбарлыҡта нисә балаға урын талап ителеүен асыҡларға кәрәк буласаҡ. Ошонан һуң ғына аныҡ эштәр билдәләнәсәк". Шулай ҙа план буйынса быйыл тиҫтәнән ашыу мәктәпкәсә белем биреү йортон сафҡа индереү көтөлә. Хакимиәт шулай уҡ шәхси балалар баҡсаһы асырға теләгән эшҡыуарҙар менән дә хеҙмәттәшлек итергә әҙер. Миҫалға Европа илдәре килтерелде, уларҙа шәхси балалар баҡсалары селтәре киң таралған күренеш булып тора. Беҙҙә әлегә был өлкәлә үҙ эшен асырға теләүселәр күренмәй.

Ҡаланың йөҙөн матурлау, халыҡтың ялын ойоштороу йәһәтенән ял һәм мәҙәниәт парктарын төҙөкләндереү күҙаллана. Шулай уҡ йәштәр өсөн экстремаль спорт менән шөғөлләнергә мөмкинлек булған парк асыу ниәте бар. "Уны Мәжит Ғафури паркы эргәһендә булдырырға уйлайбыҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөн Мәжит Ғафури паркы бик насар хәлдә. Ә элек ул ял итеү үҙәге була торғайны. Уның эшен ҡабаттан йәнләндереп ебәрергә кәрәк", - тине башлыҡ.

Ҙур ҡалалар араһында Өфө - йәйәүлеләр зонаһы булмаған берҙән-бер ҡала. Был етешһеҙлекте мотлаҡ бөтөрөргә кәрәк, тип белдерелде. Йәйәүлеләр зонаһын ҡаланың тарихи урындарында булдырыу күҙаллана. Тәү сиратта - ул Октябрь революцияһы урамы. "Унда иҫке йорттарҙы һаҡлап, 19-сы быуаттағы ҡала йөҙөн тергеҙергә кәрәк. Мостай Кәрим урамының бер өлөшөн шулай уҡ йәйәүлеләр өсөн генә ҡалдырыу тураһында фекер алышыу бара. Өсөнсө вариант - Ленин урамының бер өлөшө. Әлбиттә, унда ер аҫты үткәүеле эшләргә кәрәк буласаҡ. Йәйәүлеләр зонаһы булдырыу буйынса халыҡтың да тәҡдимдәрен ишетергә теләр инек. Бәлки, улар яҡшыраҡ вариант күрһәтер", - тине Ирек Ишмөхәмәт улы.

Беҙгә Европа ҡалаларын, унда башҡарылған эштәрҙе өлгө итеп алырға кәрәк, тигән ҡараштә Ирек Ялалов. "Үҙ ҡаҙаныбыҙҙа ғына ҡайнау ваҡыты түгел. Башҡа ҡалаларға, шул иҫәптән Европаға сығып, ундағы тәжрибәне өйрәнергә кәрәк. Һәр эштә иң яҡшы донъя стандарттарына таяныуҙы маҡсат итеп ҡуям. Аҡса етәме, юҡмы - был икенсе мәсьәлә".

Баш ҡаланың үҙенә генә хас йөҙөн, имиджын булдырыу талабы тураһында ла әйтелде. "Был тәңгәлдә идеялар бар, әммә әлегә уларҙы телгә алмай торам. Был тәңгәлдә халыҡ та үҙ тәҡдимдәрен индерергә тейеш. Һәр хәлдә, Өфө сит илдәрҙә лә танылыу яуларлыҡ ҡала булырға тейеш. Бының өсөн шулай уҡ донъя кимәлендәге төрлө сараларҙы даими уҙғарып торорға кәрәк. Әлбиттә, Париж кеүек ҙур ҡалалар Өфө өсөн өлгө була алмай. Прага, Барнаул кеүек ҡалаларға иғтибар иттем. Архитектура оҡшаш - шул уҡ хрущевкалар, 9, 12 ҡатлы йорттар, шул уҡ транспорт схемаһы. Проблемаларҙы хәл итеү тәжрибәһен уларҙан алырға мөмкин. Скандинавия ҡалаларында эш алып барыуҙар оҡшаны миңә. Унда юлдар элекке быуаттарҙа нисек булған, шул килеш ҡалған. Мәсьәлә һалым, сикләүҙәр ярҙамында хәл ителә. Ҡаланың тарихи үҙәктәренә теләгән һәр бер водитель инә алмай. Өҫтәүенә, беҙҙәге кеүек ҡиммәтле ҙур автомобилдәрҙә йөрөмәйҙәр".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Баш ҡаланың яңы башлығы менән үткән бер сәғәт күңелдә ниндәйҙер яҡты тойғолар уятты. Һәр хәлдә, быға тиклем булған ялҡытҡыс ҡабатлауҙар, бер төрлө күрһәткестәр һәм миҫалдарҙан азат булды был һөйләшеү. Яңыса ҡараш-мөнәсәбәт һиҙелде, яңырыу еле иҫеп үткәндәй булды. Ниәтләгәндәр тормошҡа ашһын, тип теләйек.**

**Мөнир ИҠСАНОВ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔ Баш ҡала округы хакимиәте балығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә бәлиғ булмаған балалар араһындағы енәйәтселек, балаларҙың хоҡуҡтарын һәм законлы мәнфәғәттәрен яҡлау тураһындағы мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнеүенсә, һуңғы биш йыл эсендә бәлиғ булмағандар тарафынан ҡылынған енәйәттәр һаны 60 процентҡа тиклем кәмегән. Өфөлә 833 ҡараусыһыҙ һәм берәҙәк бала бар, уларҙың 93-өнә дәүләт ярҙамы талап ителә.

✔ 13 һәм 15 февралдә Өфө ҡала округы хакимиәтенең Архитектура һәм ҡала төҙөлөшө буйынса баш идаралығы сираттағы йәмәғәт тыңлауҙары үткәрә. Унда Кустаревское күленән көнсығыштараҡ урынлашҡан биҫтә составындағы 1-се кварталды межалау проекты һәм Салауат Юлаев проспекты, Ҡариҙел йылғаһы, урман массивы, С.Перовская, С.Кувыкин, Менделеев урамдары сиктәрендәге террриторияны планлаштырыу проекты ҡараласаҡ.

✔ Өфөнөң Глумилино биҫтәһендә 2013 йылда аквапарк ла булған күңел асыу үҙәге төҙөлөп бөтәсәк. "Ҡашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркында планлаштырылған аквпапарк төҙөлөшө инвестор ғәйебе менән әлегә туҡтатып торолған.

✔ Өфө Эшҡыуарҙар союзының йәмәғәт ҡабул итеү бүлмәһендә урта һәм бәләкәй эшҡыуарлыҡ субъекттары эшмәкәрлеге мәсьәләләре буйынса 31 ғинуарҙа, 7 февралдә, 16 февралдә 16-18 сәғәттәрҙә бушлай консультациялар үтәсәк. Алдан теркәлеү мотлаҡ. Белешмәләр өсөн телефон: 241-47-44.

✔ Студенттарҙың тәрбиә һәм өҫтәмә белем биреү үҙәге Башҡорт дәүләт университетының туристик клубы менән берлектә гид-юл күрһәтеүселәр әҙерләүгә студенттар ҡабул итә башланы. Йәйге осорҙа төбәктең туристик фирмаларына эшкә урынлаштырыу өсөн студенттар һәм туристарҙы профессиональ яҡтан әҙерләү курстар үткәреүҙең төп маҡсаты булып тора. Шулай уҡ теләге булғандарҙы тау, һыу туризмы буйынса категориялы маршруттарға әҙерләйәсәктәр. Тулыраҡ мәғлүмәтте 8-962-540-51-84 телефоны йәки irekle@mail.ru электрон почтаһы аша алырға мөмкин.

Сәйәсәт



**Был юлы "Независимая газета" баҫмаһында Владимир Путиндың милли мәсьәләгә арналған мәҡәләһе баҫылып сыҡты. Дәүләт етәкселәре ауыҙынан был мәсьәләгә ҡағылған етди һөйләшеү бик яңғырап бармағанлыҡтан, был сығыш күптәрҙә ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Мәҡәләнән ҡайһы бер тезистар тәҡдим итәбеҙ уҡыусыларыбыҙға. Уҡығыҙ, фекер алышығыҙ, улар хаҡында, бәлки, беҙгә лә яҙып ебәрерһегеҙ, тибеҙ.**

# РӘСӘЙ ГРАЖДАНЫ БУЛ,

## үҙеңдең этник сығышыңды ла онотма...

Беҙҙәге милли һәм миграция мәсьәләләре туранан-тура СССР-ҙы, ә асылда иһә тарихи йәһәттән - XVIII быуатта нигеҙләнеп бөткән ҙур Рәсәйҙе емертеүгә бәйле. Бынан 20 йыл элек суверенитетты декларациялаған ул саҡтағы РСФСР депутаттары "союз үҙәге"нә ҡаршы көрәш ҡыҙыулығы менән тоҡанып, "милли дәүләттәр" төҙөлөшөн, һәм хатта Рәсәй Федерацияһының үҙ эсендә лә, башлап ебәрҙеләр. "Союз үҙәге", үҙ сиратында, оппоненттарына баҫым яһарға маташып, "милли-дәүләт статусын" күтәрергә вәғәҙәләр биреп, Рәсәй автономиялары менән аҫтыртын уйындар башланы. Хәҙер иһә был процестарҙа ҡатнашыусылар ғәйепте бер-береһенә япһара. Тик шуныһы ап-асыҡ: уларҙың ғәмәле фәҡәт ҡотолғоһоҙ рәүештә емертеүгә һәм сепаратизмға алып килде. Тыуған илебеҙҙең ерле бөтөнлөгөн эҙмә-эҙлекле һәм нығышмалы яҡлау өсөн уларҙа ҡаһарманлыҡ та, яуаплылыҡ та, сәйәси ихтыяр ҙа булмай сыҡты. Һәм һөҙөмтәләр оҙаҡ көттөрмәне. Ил тарҡалыу менән беҙ хатта айырым төбәктәрҙә граждандар һуғышы (әйткәндәй, төп этник нигеҙҙә) сиктәрендә тороп ҡалдыҡ. Ғәйәт ҙур көсөргәнеш һәм күп ҡорбандар менән был "янғын сығанаҡтарын" һүндереүгә өлгәшелде. Ләкин был мәсьәлә хәл ителде, тигән һүҙ түгел.

Тарихи Рәсәй - этник дәүләт тә, тотошлайы менән тиерлек мигранттарҙан торған американска "иретеү ҡаҙаны"ла түгел. Рәсәй күп милләтле дәүләт булараҡ барлыҡҡа килгән һәм быуаттар буйы үҫешкән. Ғаилә, дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек кимәлендә даими рәүештә халыҡтарҙың үҙ-ара өйрәнеү, үҙара ҡатышыу процестары барған дәүләт ул. Үҙ ерҙәрендә рустар менән бергә һәм йәнәшә йәшәүсе йөҙәрләгән этностар дәүләте ул. Ошондай уникаль цивилизация туҡымаһын берләштереп тороусы үҙәк - ул рус халҡы, рус мәҙәниәте. Төрлө рәүештәге ҡотҡосолар һәм беҙҙең дошмандар Рәсәйҙән тап бына ошо үҙәкте йолҡоп алырға маташасаҡ - рустарҙың үҙбилдәләнешкә хоҡуғы, "раса сафлығы, 1991 йылғы эште тамамлап, рус халҡының елкәһендә ултырыусы империяны тамам ҡыйратыу" кәрәклеге тураһындағы ялған ләститтәр ярҙамында.

Рәсәйҙең дәүләт үҫеше тәжрибәһе уникаль. Беҙ күп милләтле йәмғиәт, ләкин беҙ - берҙәм халыҡ. Ләкин, әгәр күп милләтле йәмғиәткә милләтселек бациллаһы зыян килтерә икән, ул көсөн һәм ныҡлығын юғалтасаҡ. Шуға ла беҙ башҡа мәҙәниәт һәм башҡа дин вәкилдәренә ҡарата милли дошманлыҡ һәм нәфрәт тоҡандырырға маташыусыларға битарафлыҡтың ниндәй эҙемтәләргә килтерәсәген яҡшы аңларға бурыслыбыҙ. Граждандыҡ солоғо һәм милләт-ара килешеү - ул даими үҫеш, диалог. Был дәүләт һәм йәмғиәттең арыуталауһыҙ эше, ул "күп төрлө берҙәмлекте" тәьмин итергә һәләтле бик "нескә" ҡарарҙар, уйланған һәм аҡыллы сәйәсәт талап итә. Үҙ-ара йөкләмәләрҙе тотоу ғына түгел, ә бөтәһе өсөн уртаҡ ҡиммәттәрҙе таба белеү кәрәк.

> **Бергә булыуҙы көсләп мәжбүр итергә ярамай. Рустарҙың бөйөк миссияһы - цивилизацияны берләштереү. Шундай дәүләт-цивилизацияға берләштереү - унда "аҙ һанлы милләттәр" булмаһын. Ә "үҙендеке һәм ситтәр"ҙе таныу принцибы булып дөйөм мәҙәниәт һәм уртаҡ ҡиммәттәр хеҙмәт итһен.**

Бында мәғарифҡа ҙур бурыс йөкмәтелә. Мәғарифтың, мәғрифәт системаһының граждандыҡ бурысы - һәр кемде халыҡтың үҙоҡшашлығы нигеҙен тәшкил итеүсе мотлаҡ гуманитар белем күләме менән тәьмин итеү. Иң беренсе сиратта бында һүҙ белем биреү процесында рус теле, рус әҙәбиәте, ватан тарихы кеүек фәндәрҙең ролен күтәреү тураһында барырға тейеш - тәбиғи, милли традициялар һәм мәҙәниәттәрҙең бөтә байлығы сиктәрендә. Беҙгә граждандыҡ патриотизмына нигеҙләнгән милли сәйәсәт стратегияһы кәрәк. Беҙҙең илдә йәшәгән һәр кем үҙенең инаныуын һәм этник сығышы тураһында онотоорға тейеш түгел. Ләкин иң тәүҙә ул Рәсәй гражданы булырға һәм быының менән ғорурланырға бурыслы. Береү ҙә үҙенең милли һәм этник сығышын дәүләт законларынан юғары ҡуйырға тейеш түгел. Ләкин шул уҡ ваҡытта дәүләттең үҙенең законлары милли һәм дини үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алырға тейеш. Федераль власть органдары системаһында милли үҫеш, милләт-ара именлек, этностар аралашыуы мәсьәләләре өсөн яуаплы махсус структура булдырыу кәрәк, тип иҫәпләйем. Әле был мәсьәләләр Төбәктәр үҫеше министрлығында ағымдағы бурыстар өйөмөнә күмелеп - икенсе, хатта өсөнсө планда тороп ҡалды һәм был хәлде төҙәтергә кәрәк. Был стандарт ведомство булырға тейеш түгел. Бында ниндәйҙер дәрәжәлә власть вәкәләттәренә эйә булған һәм туранан-тура ил президенты, хөкүмәт етәкселеге менән аралашып эшләүсе коллегиаль орган тураһында һүҙ барырға тейеш. Милли сәйәсәт фәҡәт чиновниктар кабинеттарында яҙылып, тормошҡа ашырыла алмай, уны булдырыуҙа һәм фекер алышыуҙа милли, йәмәғәт берекмәләре туранан-тура ҡатнашырға тейеш. Һәм, әлбиттә, беҙ бындай диалогта Рәсәйҙең традицион дин әһелдәренең дә ҡатнашлығына иҫәп тотабыҙ.

Шуны һәр саҡ иҫтә тотоорға кәрәк: хәл ителмәгән социаль-иҡтисади проблемалар, хоҡуҡ һаҡлау системаһындағы кәмселектәр, властың һөҙөмтәле эшләй алмауы һәм коррупцияның милли нигеҙҙәге конфликттар менән туранан-тура бәйләнеше була. Күптән түгел булып үткән милләт-ара бәрелештәрҙең тарихына күҙ һалһаҡ: Кондапога, Манеж майҙаны, Сагра булһынмы - бөтәһенең дә тап ошо "тәтегә баҫыуҙан" башланып китеүен күрәбеҙ. Бөтә ерҙә лә ғәҙеллектең булмауына, дәүләттең айырым вәкилдәренең яуапһыҙлығы һәм ғәмәлһеҙлегенә ҡарата, закон алдындағы тигеҙлеккә ышанмау, енәйәтселәргә тейешле яза бирелмәүе, бөтә нәмәнең дә һатып алынғанлығына инаныу, дөрөҫлөк булмауына асырғаныулы мөнәсәбәт белдерелә. Рәсәйҙә һәм бигерәк тә тарихи рус биләмәләрендә рустарҙың хоҡуҡтары ҡыҫылыу тураһында һүҙ сыға икән, был дәүләт структураларының үҙ бурысын үтәмәүе хаҡында һөйләй: граждандарҙың ғүмере, хоҡуҡтары һәм хәүефһеҙлеге яҡланмай. Әйткәндәй, был граждандарҙың күпселеге рус булыуын иҫәпкә алһаҡ, "рустарҙы милли ҡыҫырыҡлау" темаһына кем файҙаһы- налыр һүҙ башларға мөмкинлек тыуа. Шул уҡ ваҡытта һәр осраҡты файҙаланып, "рус фашизмы" тураһында тауыш күтәрелә. Беҙ, әлбиттә, үҙебеҙҙең демократик, күп партиялы системаны үҫтерергә тейешбеҙ. Әле бына сәйәси партияларҙы теркәүҙе һәм эштәрен ябайлаштырыу һәм либераллаштырыуға йүнәлтелгән, төбәк башлыҡтарын һайлап ҡуйыу буйынса тәҡдимдәрҙе ғәмәлгә ашырыу бара. Тик бер нәмәгә юл ҡуйырға ярамай - төбәк партияларҙы, шул иҫәптән милли республикаларҙа, ойоштороуға мөмкинлек бирмәҫкә. Был сепаратизмға тура юл.

Беренсенән, миграция сәйәсәте сифатын күпкә күтәреү кәрәклеге бәхәсһеҙ. Беҙ был мәсьәләне хәл итәсәкбеҙ. Легаль булмаған иммиграция бер ҡасан да һәм бер ерҙә лә тулыһынса тыйыла алмай, ләкин уны кәметеү, һис шикһеҙ, мөмкин. Икенсенән, беҙҙә эске миграция әүҙем үҫешә: кешеләр уҡырға, эшләргә, йәшәргә Федерацияның башҡа субъекттарына, ере ҡалаларға күсә. Кем дә кем башҡа төрлө мәҙәниәтле, тарихи традициялы төбәккә йәшәргә килә икән, ул урындарҙағы йола һәм ғәҙәттәргә ихтирам менән ҡарарға бурыслы. Рустарҙың һәм Рәсәйҙең башҡа халыҡтарының ғөрөф-ғәҙәттәренә. Башҡа һәр төрлө тәбиғи булмаған, агрессив, кәмһетеүле, ихтирамһыҙ мөнәсәбәт шуға ярашлы законлы һәм ҡаты яуап менән ҡаршы алынырға тейешле, беренсе сиратта власть органдары тарафынан, юғиһә, бөгөн улар йыш ҡына ҡул да ҡыбырҙатмай. Ҡарарға кәрәк: административ һәм енәйәт кодекстарында, эске эштәр органдары регламенттарында бындай кешеләрҙең тәртибен күҙәтеүгә алыу өсөн кәрәкле нормалар ҡаралғанмы икән. Һүҙ хоҡукты ныҒытыу, миграция ҡағиҙәләрен һәм теркәү нормаларын боҙған өсөн енәйәт яуаплылығы индереү хаҡында бара.

Киләһе йылдан миграция статусы алыу һәм уны оҙайтыу өсөн рус теле, Рәсәй тарихы һәм рус әҙәбиәте, беҙҙең дәүләт һәм хоҡуҡ нигеҙҙәре буйынса имтихан биреүҙе мотлаҡ индерергә кәрәк.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



### Баш ауыртһа

Күбебеҙ баш ауыртҡанда ятыу яғын ҡарайбыҙ, кирәһенсә, күберәк, мөсәлән, 15-20 минут хәрәкәт итергә кәрәк. Эштә булһағыҙ, саф һауаға сығығыҙ, аяҡ остарына баҫып, башығыҙҙы артҡа эйегеҙ, бер нисә тапҡыр тәрән һулыш алығыҙ. Был күнегеүҙе бер нисә рәт ҡабатлағыҙ. Өйҙә саҡта йәйәү йөрөп инегеҙ.

### Аҡ әнис (тмин)

Аҡ әнис (уны ҡырағай әнис тип тә йөрөтәләр) организмды таҙарта. Бер аҙна буйы иртәнсәк сәй урынына аҡ әнис төнәтмәһе эсегеҙ. 1 балғалаҡ аҡ әнисте сынаяҡҡа һалып, өҫтөнә ҡайнап торған һыу ҡойоғоҙ, болғатып, 30 минут төнәтегеҙ, һөҙөгөҙ һәм йылы килеш эсегеҙ. Был төнәтмә организмды бөтә шлактарҙан таҙарта.

### Тән бешкәндә

Кәстрүлгә 1 өлөш бал ҡорто балауыҙы һәм 3 өлөш көнбағыш майы һалып ҡыҙҙырып, яҡшылап болғатырға. Һыуынғас, марляға йоҡа ғына итеп һыларға һәм бешкән урынға ябырға. Был ысулды ҡулланһағыҙ, тәндең бешкән урынында эҙ ҡалмаясаҡ. Майҙы һыуытҡыстың урта кәштәһендә һаҡлағыҙ.

Тән өшөгәндә был майға бер баш ҡырылған һуған, аҙыраҡ бал ҡушып файҙаланығыҙ.

### Тутыҡҡан әйбер ҡаҙалһа

Ҡырғыстан үткәрелгән ярты бокал кер һабынына сей йомортҡа һарыһын ҡушырға һәм май (мазь) барлыҡҡа килгәнсе болғатырға. Майҙы тутыҡҡан әйбер ҡаҙалған урынға һөртөргә, бәйләргә. Май кипһә, яңынан һөртөргә, бинтты көнөнә өс тапҡыр алмаштырырға. Был майҙы ла һыуытҡыстың урта кәштәһендә һаҡларға.

### Тын бөтһә

25 грамм ваҡланған һаҙанаҡ (багульник) үләне һәм 10 грамм кесерткән япрағына 1 литр яңы ҡайнап сыҡҡан һыу ҡойорға ла, 8 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 4 мәртәбә сирек стаканлап эсергә.

**Әнүәрә МОНАСИПОВА.**

✓ *Тәрбиәле ҡатындың тағы ла бер күркәм сифаты - уның һәр ваҡытта ла ҡәнәғәт булыуында. Ҡәнәғәт булыу - табылғанына, булғанына риза булыу ул. Ҡәнәғәтлек - бер хазиналыр, ул һис ваҡытта кәмемәҫ.*






# АЛТЫН ҺАҠЛАУ...
## сер һаҡлауҙан еңелерәк

**Тәрбиәле ҡатындар ирҙәренең серҙәрен башҡаларға фаш итеүҙән һаҡланыр. Сере фаш булған кеше теләгәнә бик ауыр өлгәшер, бәлки, күп осраҡта өлгәшә лә алмаҫ. Шуның өсөн, серҙе башҡаларға белдереү - зарар булыр. Серҙең һандығы - шул уҡ күңел аҫкысы ла, тиҙәр. Сер һандығы аҫкысын яҡшы йыймаған, күңел аҫкысын юғалтҡан, йәғни телен тыймаған кеше - ахмаҡ булыр. Һәр хәлдә, сер һаҡламау - шәриғәтебеҙ ҡаршыһында оло ғәйеп.**

Үҙенең серен һаҡламайынса, икенсе бер кешегә һөйләп: "Һиңә генә әйттем, зинһар кешегә һөйләмә", - тигән кеше донъяла булған ике ахмаҡтың береһе булыр. Сөнки үҙ серен һаҡларға ҡөҙрәте етмәй, башҡаларға һөйләгәндә, уны тыңлаған кешенең быны һаҡларға нисек көсө етһен? Йөҙҙәрсә алтыныңды һаҡлау кеше серен һаҡлауҙан еңелерәк, тиҙәр. Серҙе һаҡламауы һиҙелгән кешегә ышаныс кәмер, халыҡ араһында хөрмәте юғалыр. Шуның өсөн иренең серен башҡаларға асыусы ҡатындың тоғро ҡатын булыуында ҙур шик тыуыр.

Тәрбиәле ҡатындың тағы ла бер күркәм сифаты - уның һәр ваҡытта ла ҡәнәғәт булыуында. Ҡәнәғәт булыу - табылғанына, булғанына риза булыу ул. Ҡәнәғәтлек - бер хазиналыр, ул һис ваҡытта кәмемәҫ. Етерлек миҡдарға риза булмаған кеше, ер тулы байлыҡ булһа ла, һаман ҡәнәғәтләнмәҫ. Шул сәбәпле, ҡәнәғәтһеҙлеккә дусар булған кеше әхирәт юлынан тайпылып, күп ваҡытта аҙашып ҡалыр һәм донъяның да күп мәшәҡәттәренә дусар булыр. Ҡәнәғәтһеҙ кешенең кәрәк нәмәһе күп һәм ҡомһоҙлоғо сикһеҙ булғанлыҡтан, теләгәнә өлгәшер өсөн һәр ваҡытта ялған һөйләр, ике йөҙләнәнер. Шуға ла ҡатындарға ирҙәренең бар хазиналарынан ҡәнәғәт булыу тейешле була.

Әгәр ҙә әҙәм балаһы һәр ваҡытта үҙенән түбән хәллеләрҙе күреп торһа, шулай уҡ берҙән-бер көндә үҙенең дә ошо хәленән түбән төшеү мөмкин икәнлеген күңеленә килтерһә, әлбиттә, барыһына ла шөкөр итәсәк.

Ҡулына ингән малын тейешенсә генә сарыф иткән кеше үҙенең тереклегендә лә риза булыр һәм шөкөр ҡылыр. "Һаулығың - байлығың", тиелгән һүҙҙе лә онотторға ярамай.

Өй эсен ҡарау һәм ашау-эсеү мәсьәләһендә тейешле саралар күреү хеҙмәте - ҡатындар өҫтөндә булыр. Тәрбиәле ҡатындар мал тота белергә бурыслы. Исраф итеүҙән һәм эшкә яраҡлыҡ нәмәләрҙе әрәм итеүҙән һаҡланыр.

Байлыҡты табыу - бер хәл, уны тота белергә лә кәрәк. Өй эсендә булған сығымдар һәм хеҙмәттәр ҡатындар ҡулынан үтә, шуға улар был эштәргә ирҙәргә ҡарағанда ла иғтибарлы булырға тейеш булалар. Иләккә шишмә һыуы улаҡтан ағып торһа ла, бер ваҡытта ла тулмаған кеүек, мал тота белмәгән ҡатындың ире ни ҡәҙәр аҡса тапһа ла, ул етмәйәсәк.

Йомартлыҡ- ирҙәр өсөн гүзәл холоҡ булған хәлдә лә, ҡатындар өсөн бер ҡәҙәр ғәйеп, тиҙәр. Шуға ла һәр ҡатынға мал тота белеү һәм белеп ғәмәл итеү тейешле.

ӘЙҘӘГЕҘ...

**Хәҙерге заманда өй йыһазлау, биҙәү бер төрлөлөккә барып төртөлә кеүек, һәм күҙгә ташланып торған айырмалыҡ юҡ кимәлдә. Ләкин ҡайһы бер өйҙә үҙеңде бөтөнләй икенсе төрлө тояһың. Был тойғоноң ҡайҙан барлыҡҡа килеүен ҡапыл ғына аңлауы ла мөмкин түгел, тик бер аҙ ваҡыт үткәс кенә был мөғжизәнең асылына төшөнәһең. Бәхтиһән, өйҙәге башҡорт биҙәктәре менән эшләнгән балаҫ-түшәктәр, башҡорт кейемдәре, биҙәүестәр, шулай уҡ башҡа ҡул эштәренең күплеге нәҡ ошо тойғоно тыуҙыра икән. Ҡоро һәм йәнһеҙ йорт йыһаздары араһында йәшәп, ҡатып барған күңел был мөхиттә асылып, хатта тын алыуҙары иркенәйгәндәй, оҫтаның ҡул һәм күңел йылыһы һалынған һәр әйберҙән яҡтылыҡ ағылғандай. Ошондай өйҙәрҙең береһе Әбйәлил районы Ҡаҙмаш ауылында бар, ә ҡул эштәренең оҫтаһы, Башҡортостандың Мәғариф отличнигы - Шәрифә ХӘЛИСОВА. Бөгөнгө әңгәмәбеҙ оҫталыҡ, маһирлыҡ һәм башҡорт биҙәктәренең үҙенсәлеге хаҡында булыр.**

# БАШҠОРТСА БИҘӘЙЕК ӨЙӨБӨҘҘӨ...
## үҙ асылыбыҙҙа булыу өсөн

### Һәр һөнәрҙең асылы - матурлыҡҡа һоҡланыуҙан

Кешелә сабый саҡтан уҡ матурлыҡҡа һоҡланыу тойғоһо йәшәй. Баланы бер нәмә лә аңламай, тип уйларға ярамай, сөнки тирә-яҡтың матурлығы, хозурлығы менән һоҡланыу, уға табыныу кешенең булмышына һалынған. Үҫә бара унда ошо гүзәллекте үҙ ҡулдары менән эшләп ҡарау, үҙен уратҡан матурлыкты ҡағыҙға, йырға, шиғырға күсереү йәки башҡа төрлө итеп күрһәтеү, хис-тойғоларын башҡаларға ла еткереү теләге уяна һәм ошо ынтылыштарҙан сығып та кеше үҙенең ғүмерлек һөнәрен һайлайҙыр, тип әйтергә була. Был бары тик сәнғәткә, ижадҡа ғына ҡайтып ҡалмай, сөнки һәр һөнәр үҙенең асылы менән матурлыҡ һәм изгелек сығанағы, тик быны аңларға һәм күрә белергә генә кәрәк.

Минең дә бала саҡтан булған сигеү һәм бәйләүгә, тегеү һәм башҡа төрлө ошондай ҡул эштәренә ынтылышым ғүмерлек һөнәремә, йәшәү рәүешемә әйләнде. Хеҙмәт дәресе уҡытыусыһы һөнәрен үҙләштергәс, Ҡаҙмаш мәктәбендә эш башланым һәм хаҡлы ялға сыҡҡансы балаларға белем бирҙем. Был һөнәр үҙенә барлыҡ ихласлыҡты һалыуҙы талап итә, сөнки шул саҡта ғына балаларға үҙ дәресеңде яраттырырға, уларҙа һөнәреңә һөйөү уятырға мөмкин. Хеҙмәт дәресе уҡытыусыһы үҙ эшен бары тик дәрес уҙғарыуға ғына ҡайтарып ҡалдырырға түгел, ә өйҙә лә, аҙ генә буш ваҡытында ла үҙ һөнәрен камиллаштырыу өҫтөндә эшләргә, яңынан-яңы төр ҡул эштәрен өйрәнергә, бәйләү, сигеү, тегеү серҙәренә төшөнөп, уҡыусыларҙы ла ҡыҙыҡһындыра белергә тейеш. Был өлкәлә инде үҙләштереһе ысул да, өйрәнәһе биҙәк тә ҡалмаған кеүек, ләкин барыбер эҙләнеүҙе, яңынан-яңы офоҡтар асыуҙы дауам итергә кәрәк.

### Башҡорт кейеҙенең матурлығы һәм файҙаһы

Ҡул эшенә оҫталыҡ һәр хужабикәгә үҙ өйөн күркәмерәк итеү мөмкинлеге бирә, сөнки улар тирә-яҡҡа айырым яҡтылыҡ һәм матурлыҡ өҫтәй. Үҙ ҡулдарың менән бәйләнгән әйберҙе кейеү, бар нескәлектәрен күҙ уңында тотоп, матур биҙәктәр менән сигелгән таҫтамал менән ҡулланыу, матур сәскәләр төшөрөлгән мендәргә ятып йоҡлау -барыһы ла тормошто йәмлерәк һәм тулыраҡ итә. Тик өйөндә беҙҙең милләткә генә хас биҙәкле балаҫ, кейеҙ йәки башҡа төрлө әйбер булмаһа, быларҙың барыһы ла тоноҡланып ҡалғандай. Шуға күрә һәр башҡорт ғаиләһенең өйөндә кейеҙгә, башҡорт орнаментлы башҡа әйбергә урын булырға тейеш, тигән фекерҙәмен, сөнки улар өйгә ҡот һәм йылылыҡ ҡына өҫтәп ҡалмай, шулай уҡ балаларға үҙ милләтенең тарихы менән танышырға, үҙенең булмышына яҡынайырға мөмкинлек бирә.

Беҙҙең өйҙә быңдай әйберҙәргә ҙур урын бирелә һәм төп урындарҙың береһен кейеҙ биләй. Кейеҙҙең быуындан-быуынға күсеп килгәне лә, үҙем эшләгәндәре лә байтаҡ. Кейеҙ - башҡорт халҡында элек-электән ҙур һорау менән файҙаланған һәм уны башҡорт ауылының һәр өйөндә матур, үҙенсәлекле итеп эшләй белгәндәр. Кейеҙ эшләү һөнәре юғалып барған еренән, ҡыуаныусҡа күрә, кире тергеҙелә башланы. Айырыуса үҙебеҙҙең Әбйәлил районы ҡатын-ҡыҙҙары был эштә әүҙемлек күрһәтә. Республика кимәлендә уҙғарылған кейеҙ байрамдары, шулай уҡ Башҡортостан, Рәсәй студенттарының беҙҙең районға килеп кейеҙ баҫыу нескәлектәренә төшөнөүе лә ошоға асыҡ миҫал булып тора. Кейеҙ - башҡорттоң өйөндә биҙәү элементы булараҡ та, йорт йыһазы кеүек тә файҙаланылған, һуғыш ваҡытында яугирға түшәк-юрған ролен дә үйнаған, атты ябыу өсөн дә ҡулланылған. Ул шулай уҡ элек тә, хәҙер ҙә иң ҡәҙерле ҡунаҡ килгәндә түшәй торған әйбер.

Кейеҙҙең матур, ҡулайлы, уңайлы булыуы менән бер рәттән, һаулыҡ өсөн дә файҙалы булыуын





**✓ Кейеҙҙә рәссамлыҡ фантазияһын тулыһынса тормошҡа ашырырға мөмкин. Мәҫәлән, был идеяны ҡыҙым Әлфиә үҙ шәжәрәһен күрһәтеү өсөн ҡулланды, ете быуын ата-бабаһы хаҡында мәғлүмәт тупланған кейеҙ баҫты.**



онотоорға ярамай. Кейеҙ баҫыуҙың мине ҡыҙыҡһындырған тағы ла бер яғы бар: кейеҙҙә рәссамлыҡ фантазияһын тулыһынса тормошҡа ашырырға мөмкин. Мәҫәлән, был идеяны ҡыҙым Әлфиә үҙ шәжәрәһен күрһәтеү өсөн ҡулланды, йәғни, ете быуын ата-бабаһы хаҡында мәғлүмәт тупланған кейеҙ баҫты. Кейеҙҙе өйҙә биҙәү, бүләк өсөн, сувенир рәүешендә лә ҡулланырға була. Ғөмүмән, башҡорт кейеҙенең киләсәктә башҡорт балы, ҡурайы һәм аты, тәбиғәте һәм ҡымыҙы менән бер рәттән Рәсәй генә түгел, бөтә донъя кимәлендә билдәлелек яуларына ышанам.

### Ҡорама

Башҡорттоң тағы ла бер үҙенсәлекле, ҡатмарлы һәм ҡыҙыҡлы ҡул эштәренең береһе - ҡорама. Күп төрлө материал һәм кейергә ярамаҡһыҙ, иҫке әйберҙән һүтеп-ырҡып, төрлөсә биҙәп эшләнгән ултырғыс япмалары, урын-ергә йәйеп ҡуйырлыҡ ҙур түшәктәр йәки матурлыҡ өсөн эшләнеп, ҡәҙерләп һаҡланған ҡорамалар - барыһы ла өйгә йылылыҡ, күркәмлек биреп тора. Ҡорамалар бер-береһенә оҡшаған кеүек булһа ла, һәр хужабикә, оҫтабикә уны үҙенсә эшләй, һырлай, матурлай. Улар һис ҡасан да бер төрлө була алмай, сөнки тышҡы оҡшашлыҡ булһа ла, уларҙың һәр береһенә айырым күңел йылылығы бирелгән, һәр береһе төрлө ваҡиғалар эсендә эшләнгән әйберҙәр. Һәр ҡораманың үҙ биҙәге, үҙ яҙмышы. Ҡорама уны эшләгән кешенең эске торошон сағылдырыуы һәм шулай уҡ оҫтаның тирә-яҡҡа булған ҡарашын билдәреүсе лә булып тора, сөнки ниндәйҙер күңел төшөнкөлөгө баҫҡан ваҡытта эшләнгән ҡораманың төҫтәре лә тоноҡ, бойоҡ булырға мөмкин, ә, киреһенсә, шат күңел менән башҡарылғаны үҙенең сағыу төҫтәре, биҙәктәре менән әллә ҡайҙан кешене үҙенә тартып, "йылмайып-көләп" торған кеүек.

### Ҡул эшендә - күңел йылыһы

Өйҙө тултырып йорт йыһазы, төрлө электрон әйбер, техника булып та, күңел биреп, бар наҙынды һалып, күҙ нурынды түгеп эшләгән әйбер булмаһа, бында ҡот та, матурлыҡ та, йәнлелек тә юҡ кеүек тойола. Шуға күрә һәр хужабикәнең өйөндә ҡул эштәре булырға тейеш, тигән фекерҙәмен. Мин уҡыусыларымды тегеү, сигеү, бәйләү серҙәренә өйрәтеп, тормоштарында кәрәк буласаҡ оҫталыҡ бирергә тырыштым һәм уларҙың был шөғөлгә ылығып, күҙҙең яуын алырлыҡ ҡул эштәре эшләүҙәренә ҡарағанда, улар күңелендә был һөнәргә һөйөү уята алғанмын.

Үҙемә килгәндә иһә, әҙ генә буш ваҡытым булһа, шунда уҡ ҡул эшенә тотонам. Уның ниндәй булыуы мөһим түгел, тик башлаған ҡул эшен тиҙерәк тамамлау теләге мине һәр саҡ алға этәрә, ҡулыма еңеллек, күҙемә нур бирә. Ойоҡбейәләй, төрлө биҙәк менән кофта-жилет, хатта пальто бәйләп була, ә һәр саҡ яңы төрлө биҙәк эҙләү, уны аңлау, һүрәттә күрһәтелгәнде тормошҡа ашырыу үҙе үк ҡыҙыҡлы процесс. Шулай уҡ таҫтамал, мендәр тыштары сигеү ҙә күңелле эш: биҙәк артынан биҙәк ялғанып, төрлө төҫтәргә мансылып, яңы сәнғәт өлгөһө барлыҡҡа килә. Шулай тием, сөнки һәр бер ҡул эше, бәләкәй булһынмы ул, ҙурмы, юғары кимәлдәге оҫталыҡ менән башҡарылғанмы, әллә өйрәнсектең ҡулы аҫтынан сыҡҡанмы - барыһы ла сәнғәт өлгөһө. Биҙәкле-нағышлы был әйбер айырым кеше йәки тотош бер ғаиләнең тарихын, эстәлеген, булмышын үҙенә алып, йылдар, хатта быуаттар дауамында тапшырылып килергә мөмкин. Уйлап ҡарағыҙ: был әйбер быуындан-быуынға күсеп, үҙенә төрлө яҙмыш, төрлө характер, төрлө йылдарҙың шатлыҡ-ҡайғыһын, әсе буранын һәм аяҙ көндәрен йыйып, киләсәк быуындарға барып етәсәк һәм, һис шикһеҙ, ейән-бүләсәләр өйөндә иң ҡәҙерле ҡомартҡы буласаҡ.

### Һәр биҙәк - мөһим роль уйнаусы элемент

Беҙҙең милләт һәр биҙәкте төптән уйлап, урын-еренә еткереп эшләгән һәм һәр береһен буш биҙәүес итеп түгел, ә мөһим роль уйнаусы элемент булараҡ ҡабул иткән. Кейемдә, ҡул эштәрендә ҡулланылған һәр биҙәк - ул һыҙыҡ, линия, түңәрәк һәм төҫтәр йыйылмаһын ғына туплаусы түгел, ә беҙҙең донъяға ҡарашыбыҙҙы билдәләүсе, милләт фәлсәфәһен үҙ эсенә алыусы ла. Өй стенаһында эленеп торған балаҫтағы, иҙәнгә түшәлгән кейеҙҙәге, башҡорт милли кейемендәге, төрлө биҙәнеү әйберендәге биҙәктәрҙең һәр береһе ниндәйҙер мәғәнәгә һәм аңлатмаға эйә. Боронғолар ошо биҙәктәр ярҙамында үҙҙәрен яуыз көстән, күҙ теләүҙән һаҡлаған. Был ышаныуҙар буш урында барлыҡҡа килмәгән һәм үҙ бурысын теүәл үтәгән, тип әйтергә була. Шуға күрә беҙгә үҙ асылыбыҙҙан ситләшмәй, быуындар бәйләнешен юғалтмай, байрамдарҙа ғына түгел, ә көндәлек тормошобоҙҙа ла башҡорт биҙәген, орнаментын һаҡлаған әйберҙәр ҡулланырға кәрәк. Был беҙгә матурлыҡ һәм һөйкөмлөлөк кенә түгел, ә рухи ныҡлыҡ, күңел күтәренкелеге, камиллыҡ та бирәсәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һәр әйбер үҙе тирәләй билдәле энергетик майҙан булдыра һәм ул, үҙ сиратында, беҙгә тәьҫир итә. Был энергетиканың ыңғай йәки кире булыуын контролдә тотоп буламы? Әлбиттә, була. Бының өсөн үҙебеҙҙе күңелебеҙгә ятышлы һәм йөрәгебеҙгә яҡын әйберҙәр менән уратыу мөһим. Улар араһында ата-бабаларҙың изге рухы һеңгән, беҙҙе яуыз-яман күҙҙән һаҡларҙай әйберҙең булыуы ла мөһим. Шулай уҡ өйөбөҙҙә милли биҙәкле әйберҙең дә урын алыуы күңел тыныслығын һаҡларға, рухи үҫеш киҫерергә һәм кире энергетикаға ҡаршы торорлоҡ көс бирәсәген күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа кәрәк.**

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

---

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



## ВАТАНСЫЛЫҠ ТРАДИЦИЯЛАРЫ

**Ватансылыҡ тойғоһо тәрбиәләүҙә миллилекте нигеҙ итеп алыуҙы күп халыҡтарҙа күрергә мөмкин. Башҡорт халҡында оҙаҡ йылдар үҫеп килеүсе быуынды хәрби, һуғышсан итеп тәрбиәләү эҙмә-эҙлекле алып барылып, ҡәтғи системаға һалына һәм ул үҙенә түбәндәгеләрҙе ала: спорт ярыштары; хәрби уйындар; һунар; һүҙ тәрбиәһе; традицияларҙы дауам итеү; фольклор.**

Был фекерҙе раҫлау өсөн тарихҡа мөрәжәғәт итеү ҙә етә, ул беҙгә бик күп дәлилдәр еткерә. Мәҫәлән, 1798 йылдың апрелендәге указға ярашлы, Башҡортостанда казак ғәскәре һәм идара итеүҙең кантон системаһы индерелә. 20-50 йәштәге сәләмәт ир-ат башҡорт казағы була алған. Улар үҙҙәренең аттары, үҙ ҡоралы менән хеҙмәт иткән, бер нисә төрлө милли хәрби кейемгә эйә булған. Хәрби ҡоралға ике пистолет йәки башҡа ҡорал, ҡылыс, уҡ-ян, казак һөңгөһө, арҡан ингән. Батыр исемен алыу өсөн егет кеше күп нәмә белергә тейеш булған. Хәҙергесә итеп әйткәндә, хәрби комплексҡа атта оҫта йөрөү (джигитовка), һыуҙа балыҡтай йөҙөү, уҡтан сәпкә тура атыу, арҡан менән оҫта эш итеү һ.б. ингән.

Ысын хәрбиҙе әҙерләү бала саҡтан уҡ башланған. Саҡ атларға өйрәнгән улын атаһы ғорурлыҡ менән атҡа ултыртҡан. Ә инде атты менгегә өйрәтеү егет кеше өсөн ҙур һынау булып торған. Бының өсөн физик көс тә, түҙемлек тә, таһыллыҡ та талап ителгәс, йәштәр тап шул сифаттарға эйә булырға тырышҡан да инде. Йәш егеттәр милли көрәш алымдарын да, ҡорал тоторға ла белергә тейеш булған. Хәрби сынығыуҙың үҙенең эҙмә-эҙлеге лә күҙәтелгән: һунар кинжалы менән эш итергә өйрәнгән икән - ҡулына ҡылыс ал, ҡылысты ла үҙләштерҙең икән - быҫаҡ ташлау оҫталығын үҫтер. Оҫталыҡтың иң юғары бейеклеге булып уҡтан атыу һаналған. Шулай уҡ малайҙарҙы һунар ҡоштары менән һунар итеүгә өйрәтеү ҙә киң тарала. Бының өсөн атай-олатайҙар малайҙарҙы мотлаҡ һунарға алып сыҡҡан, үҙ тәжрибәһендә буласаҡ һунарсылар тәрбиәләгән. Бер ыңғай йәштәр ниндәй миҙгелдә ниндәй йәнлеккә йәки ҡошҡа һунар итеү серҙәрен дә өйрәнгән. Балаларҙы тәрбиәләгәндә урмандың, ер-һыуҙың, күк йөҙөнөң "китабын" уҡый белеүгә ҙур иғтибар бирелгән. Шулай итеп улар үлән аҫтында йәшеренеп ултырған, үләндә, ташта, ерҙә ҡалдырған эҙ буйынса йәнлектәрҙе табырға, урман тауышын яҡынлашып килгән хайуан ҡыштырлауынан айырырға өйрәнгән.

Хәҙерге тикшеренеүселәр өсөн уҙған быуаттарҙа үҫеп килеүсе быуынды һүҙ менән тәрбиәләү феномены һаманғаса ахырынаса өйрәнелеп бөтмәгән.Ололарҙың йәштәргә бағышланған абруйлы һүҙе уның күңелендә сағылыш таба. Былдай тәрбиә элекке заманда ғына түгел, уҙған быуаттың 20-40-сы йылдарында ла халыҡ педагогикаһында бик әһәмиәтле була.

Октябрь революцияһына тиклем халыҡ тарихы, философияһы, социологияһы фольклор аша тарала. Башҡорт тарихи эпостары көсле шәхестең үҙ халҡының бәхете өсөн көрәштә күрһәткән батырлығын, ҡаһарманлығын данлай. "Башҡортостандың үҙенсәлеге - башҡорттарҙың яҙмышын, уларҙың азатлыҡ өсөн көрәшен, ситтәр иҙеүе аҫтында ыҙа күреүен шиғри юлдар, легендалар һәм халыҡ сағалары аша таратып йөрөүсе дәрүиштәрҙең күплегендә", - тип яҙа Вена гәзите башҡорттар тураһында китап сығарған яҙыусы Крашенинниковтың әҫәрҙәренә баһа биреп.

**Ильяс ВӘЛИЕВ, тарих фәндәре кандидаты.**

---

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# БЕР-БЕРЕГЕҘҘЕҢ...

## хаталарын йәшерегеҙ

**Кешеләргә хата ҡылыу хас. Шунһыҙ йәшәп булмай. Әммә әхлаҡлы кеше үҙ хатаһын таныу менән Аллаһы Тәғәләнән ғәфү үтенә йәки Хоҙайҙан, зыян күргән кеше мине ғәфү итһен, тип һорай.**

Хатаны йәки насар ҡылыҡты төҙәтеү ҙә изгелек һанала. Аллаһ сифаттарының береһе - Саттар. Хоҙай үҙ ҡолдарының хаталарын һәм гонаһтарын йәшерә, башҡаларға күренмәслек итә, тигән һүҙ. Кешеләр араһында Хоҙайҙың был сифаты сағылыш тапмаһа, бөтәһе лә бер-береһенең етешһеҙлеген, йәмһеҙ яҡтарын белгән булыр, хурланыу һәм оялыу тойғоһо менән йәшәр ине. Ундай йәмғиәттә проблемалар һәм конфликттар күпкә артығыраҡ булыр ине.

Изге Ҡөрьәндә Аллаһы Тәғәлә кешеләрҙең насар ҡылыҡтарын йәшереүе хаҡында бер нисә ҡабат әйтелә ("Әл-Әнкәбүт" сүрәһе, 27/7). Айырыуса Хоҙай билдәле бер ыңғай сифаттарға эйә булған кешеләрҙең етешһеҙ яҡтарын башҡаларға күрһәтмәй. Ул сифаттар Ҡөрьән аяттарында телгә алына.

Тәү сиратта - иман. Иман артында һәр ваҡыт "сәлих әмәл" (дөрөҫ ғәмәл) торорға тейеш. Был хаҡта "Мөхәммәт" (47/2) һәм "Әт-Тәғәбүн" (64/9) сүрәләрендә әйтелә. Икенсе мөһим сифат - тәҡүә - гонаһ һаналған күренештәрҙән тыйылыу ("Әз-Зөмәр" сүрәһе, 39/35). Шулай уҡ тәүбәгә килә торған кешеләрҙең хаталары һәм гонаһтары йәшерелә ("Әт-Тәхрим" сүрәһе, 66/8).

Тағы бер сифат - ихласлыҡ. Һәр эш-ғәмәлдә ихлас башҡарырға кәрәк, шунһыҙ Хоҙайҙың изгелегенә өлгәшеп булмаҫ ("Әл-Баҡара" сүрәһе, 2/271). Аллаһы Тәғәлә тарафынан ғәфү ителеүгә өлгәшеү өсөн тағы бер мөһим сифат - доға ҡылыу. Хоҙай бөтә мөьминдәрен доға ҡылырға саҡыра ("Әли-Имран" сүрәһе, 3/193).

Ошо сифаттарға эйә булғандарҙың хаталары донъяла ла, әхирәттә лә йәшереләсәк. Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм), беҙгә билдәле булған кемдеңдер йәмһеҙ яҡтарын башҡаларҙан йәшерергә саҡыра. Кем мосолмандың хатаһын йәшерә, шуның гонаһтарын Хоҙай әхирәттә күрһәтмәй, ти. Һәм, киреһенсә, кем мосолмандың хатаһы өсөн башҡалар алдында оятҡа ҡалдырасаҡ, шул үҙе шундай уҡ хата ҡылмайынса, был донъянан китмәйәсәк, тип әйтә Бәйғәмбәребеҙ. Ошоноң менән ул бер-береңде ғәйепләү, кәмһетеүҙәрҙең ҡыҙғаныс эҙемтәләргә килтереүен күрһәтергә теләгән.

Етешһеҙлектәрһеҙ кеше булмай. Шуға күрә мосолман һәр ваҡыт башҡа кешенең хилаф, йәмһеҙ яҡтарын йәшерергә тейеш.

*✓ Диплом эше яҙыр өсөн архивта ултырып, бик күп енәйәт эштәрен тикшерҙем. Шунда 1985 йылғы эскелеккә ҡаршы кампания башланғандан һуң енәйәтселектең 80-90 процентҡа кәмеүен асыҡланым.*



**Гүзәл Фуат ҡыҙы ХАРРАСОВА хоҡуҡ һаҡлау органдарында өс тиҫтә йылдан ашыу хеҙмәт итә. Юғары юридик белем алғандан һуң ул үҙенең хеҙмәт биографияһын Белорет ҡалаһында тәфтишсе булып башлай. Артабан - милиция майоры, прокурор ярҙамсыһы, енәйәт эштәре буйынса дәүләт гәйепләүсеһе, ә инде 2008 йылда отставкаға киткәндән һуң ул Башҡортостан Республикаһы Адвокаттар коллегияһының Өфөләге "Көньяҡ" филиалында адвокат булып эшләй башлай. Гүзәл Фуат ҡыҙының гәзит уҡыусылар менән үҙе эшләгән даирәгә бәйле уртаҡлашыр фекерҙәре бихисап. Бигерәк тә юридик кәңәшкә, һүҙ ярҙамына мохтаж булған хәҙерге тынғыһыҙ заманда уның әңгәмәһенән күптәр үҙен борсоған мәсьәләләр хаҡында яуаптар таба алыр, тип ышанабыҙ. Һүҙ - Гүзәл Фуат ҡыҙына.**

# АЛҒА ТАБАН АТЛАНМАҒАН

## артҡа табан

### Ашаған белмәй, тураған белә...

Һәр илдең закондарға ҡарата үҙ мөнәсәбәте бар. Закон тайпылышһыҙ үтәлгән Европа илдәрендә, Америкала, мәсәлән, кешене алдау ҙа мөмкин түгел, тиҙәр. Һәр ил граждандарының законға мөнәсәбәте, уны күҙәтеүе уларҙың менталитетына ла бәйле. Әйтәйек, Америка, шул уҡ Европа илдәренең күбеһе Рәсәй иле үткән тарихи юлды үтмәгән, Рәсәй граждандары кисергән ауырлыҡты, күп миллионлы ҡорбан килтергән һуғыштар кеүек экстремаль хәлдәрҙе кисермәгән. Шуға күрә уларҙың законға ҡарашы ла тыныс тормош кешеһе күҙлегенән формалашҡан. Әйтәйек, шәхес культы осоронда, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында беҙҙең ил граждандары бер кеҫә бойҙай, бер биҙрә картуф урлаған өсөн дә атыуға хөкөм ителә алған. Шуға күрә ул саҡта закон алдында ҡалтырап торолған. Хәҙер илебеҙ граждандарының законға ҡарашы бөтөнләй үҙгәрҙе. Беренсенән, элекке идеология урынына бер ниндәй ҙә яңы идеология, милли идея барлыҡҡа килмәне, икенсенән, элек ныҡлы сиктәр, ҡалыптар эсендә көн иткән кеше азатлыҡ елдәре иҫеүгә үҙен бәйәһен ысҡынған эт һымаҡ тоя башланы. Хәҙерге беҙҙең ил кешеһенең үҙен бәйһеҙ тотоуы законға ҡарата мөнәсәбәтендә генә түгел, тормоштоң башҡа күп төрлө тармаҡтарында ла сағылыш таба. Беҙҙең ил бөгөн законға мөнәсәбәт буйынса бик ауыр осор кисерә. Сөнки илебеҙҙә һәр кимәлдә ришүәтселек, коррупция сәскә ата һәм күп кенә закондарҙы һәм закон аҫты акттарын юғарыла ултырыусылар үҙҙәренең мәнфәғәтенә ярашлырып яҙа. Мәсәлән, "Банкротлыҡ тураһында"ғы Федераль закон, асылда, илебеҙҙә юҡҡа сығарыуға йүнәлтелгән закон ул. Беҙҙең закондарыбыҙ барыһы ла камил түгел, уларҙың етешһеҙ яҡтары бик күп һәм закондарҙың күбеһе халыҡты яҡлауға йүнәлтелмәгән. Был күренештәрҙең барыһы ла илебеҙ граждандарының законға һәм уны сығарыусыларға ышанып етмәүенә, уларҙың психологияһын үҙгәртеүгә килтерҙе.

Мин закон сығарыусы түгел, ә уны үҙ эшемдә ҡулланыусы ғына. Әммә практик булараҡ, закондарға баһа бирергә лә хаҡым барҙыр, тием. Беҙҙең закондарҙың камил булмауының төп сәбәбе - закон сығарыу органдарында практик эш тәжрибәһе булған юристар юҡлығындалыр, тим. Ашнаҡсы аш бешерергә, итексе итек тегергә, ташсы таш сығарырға, закондарҙы юристар сығарырға тейеш. Закон сығарыу органдарында теоретик белемгә һәм практик тәжрибәгә эйә юристар булыуы мотлаҡ. Сөнки закондың етешһеҙлеген тик уны тормошҡа ашырғандар ғына белә. "Ашаған белмәй, тураған белә", тиҙәр бындай осраҡта.

### Өс сәбәп бар...

Хәҙерге ваҡытта гәйепһеҙгә яуапҡа тарттырылыусыларҙың, төрмәлә ултырыусыларҙың һаны ҙур. Хатта 30 проценттан да кәм түгел, тип әйтһәм дә хата булмаҫ. Бының төрлө сәбәптәре бар: беренсенән, был хәл закондарҙағы етешһеҙлектәрҙән килә. Һуңғы ҡабул ителгән "Енәйәт кодексы"нда бик күп нормалар тик енәйәтсене яҡлау өсөн генә ҡаралған һымаҡ. Ә бына енәйәттән зыян күреүселәрҙе яҡлау кодекста бөтөнләй тип әйтерлек ҡаралмаған. Был хәл беҙҙең эштә бик ҙур ауырлыҡтар тыуҙыра.

Ғәйепһеҙ кешеләрҙең төрмәлә ултырыуының икенсе сәбәбе - хоҡуҡ һаҡлау системаһындағы коррупция. Үкенескә ҡаршы, күп осраҡта бик тәжрибәле адвокат та барыбер ошо коррупция һәм бюрократия стенаһына бәрелә.

Өсөнсө сәбәп: граждандарҙың юридик яҡтан бөтөнләй наҙанлығы һәм шул белемде алырға ынтылмауы. Күп граждандар хатта юридик консультация алырға кәрәк икәнде лә белмәй. Европа илдәрендә, мәсәлән, һәр кешенең үҙ адвокаты бар. Уларҙа кеше ниндәйҙер бер хәлгә тарыһа, иң тәүҙә телефон аша адвокатынан консультация ала. Адвокат уларҙа бер үк ваҡытта психолог ролен дә үтәй. Ә беҙҙә иһә, эш үткәс, тәфтишсе һорау алғас, кәрәк-кәрәкмәгән аңлатмалар бирелгәс, адвокатҡа илап киләләр. Бындай осраҡта, ысынлап та, эш үткән була һәм ниндәйҙер процестарҙы кирегә бороу йә туҡтатыу бик ауырға төшә, йә бөтөнләй мөмкин булмай сыға.

Әлбиттә, граждан барлыҡ закондарҙы ла белеп бөтә алмай, әммә был хәлдән сығыу юлы - тәжрибәле адвокатың булыуы. Конституцияның 51-се статьяһына ярашлы, кешенең үҙенә, туғандарына һәм яҡындарына ҡаршы аңлатма бирмәҫкә хоҡуғы бар. Шуға күрә ниндәйҙер хәлгә тарыған ваҡытта адвокатһыҙ бер ниндәй ҙә аңлатма бирмәҫкә кәңәш итер инем. Сөнки йыш осраҡта тәүләп биргән аңлатма азаҡтан төп гәйепләү дәлиленә әүерелә. Ауыр хәлгә ҡалған кеше стресс кисерә, әммә 1-2 көн үтеүгә уның хәле нормалләшә һәм тик шул осраҡта ғына ул кеше адекват хәлгә килә. Был осраҡта кеше булып үткән хәлдең һәр бер детален иҫенә төшерә, ситуацияға объектив баһа бирә ала. Беҙҙең граждандар тағы ла протоколдарҙы уҡып та тормайынса, ҡул ҡуйырға ашыға. Был шулай уҡ дөрөҫ түгел. Сөнки был осраҡта кеше "Мин кеше үлтерҙем" тигән һүҙҙәрҙең аҫтына ла ҡул ҡуйыуы ихтимал. Аңлатма биргән саҡта ла һүҙҙәрҙе самалап, дөрөҫ итеп һайларға кәрәк. Сөнки бер генә һүҙҙә яңылыш әйтеүең арҡаһында мәғәнә бөтөнләй үҙгәреүе, шуның менән яҙмышың ҡырҡа үҙгәреүе мөмкин.

### Ирҙәр яҡлауға мохтаж

Беҙҙең илдә XX быуатта ир-аттар һанының кәмеүе һәләкәтле төҫ алды. Әлбиттә, асылыҡтарҙан, эпидемияларҙан, ике донъя һуғышынан, шәхес культынан һәм башҡа афәттәрҙән ҡатын-ҡыҙҙар ҙа һәләк булды, әммә иң күп ҡырылғаны барыбер ирҙәр булды. Шуның эҙемтәләрен беҙ бөгөн татыйбыҙ: ысын мәғәнәһендәге ирмен тигән ирҙәр бик һирәк ҡалды. Шул арҡала нәҫелдә дауам итерлек ир-егеттәребеҙ ҙә ҡалманы тиерлек. Ә инде һуғыштан ҡайтыусы ир-аттарыбыҙ, фронт паегына индерелгән спирт арҡаһында эскелеккә дусар ителде. Хатта илебеҙҙең хәҙерге иҡтисади-сәйәси бөлгөнлөгөн дә ошо хәл менән аңлатырға мөмкин. Был хәлдәр тиҫтәләрсә йылдар һуҙымында дауам итеп, ил ирҙәренең нәҫелдә дауам иттерер потенциалына зыян яһаны һәм яһай, генофондтың көсһөҙләнеүенә килтерә. Ирҙәрҙең икенсе планға күсеүе, ҡатын-ҡыҙҙарҙың елкәһенә күсеп ултырыуы, үҙ асылын юғалтыуы, ғаиләләрҙең күпләп тарҡалыуы, яңғыҙ әсәләрҙең күбәйеүе, етем балалар ошо уҡ күренештең дауам итеүенә бәйле. Беҙҙең илдә ир-аттар һәм ҡатын-ҡыҙҙар һанындағы дисбаланстың бер генә быуат осоронда нормаға килеүенә шикләнәм. Улар һаны ҡасан да булһа тигеҙләнгән хәлдә лә, ике енес вәкилдәренең үҙ-ара мөнәсәбәте, социаль роле элекке асылына ҡайтмаясаҡ. Сөнки ошо оҙайлы осорҙа уларҙың үҙ-ара аралашыу тәртибе ике яҡтың да аңына генетик кимәлдә һеңәсәк һәм нәҫелдән-нәҫелгә күсәсәк. Ошо күҙлектән дә сығып ҡарағанда, Бөйөк Ватан һуғышы килтергән һәләкәт илебеҙ халҡы, уның генофонды кисергән кире һөҙөмтә һуң менән генә аңлатҡылыҡ.

Ирҙәр менән ҡатын-ҡыҙҙар араһындағы баланс һаҡланған илдәр һәм дәүләттәр беҙҙең ил күргән һәләкәттәрҙе кисермәне. Ундай илдәрҙә балалар атаһы менән әсәһе генә түгел, ә олатаһы-өләсәһе булған бәхетле ғаиләләрҙә тәрбиәләнә. Ундай илдәрҙә ир-ат - үҙ урынында, ҡатын-ҡыҙ - үҙ урынында. Ошо йәһәттән ҡарағанда, беҙҙең илдә күп закондар ҡатын-ҡыҙҙарҙы яҡлауға йүнәлтелгән, ә ирҙәрҙе яҡлаусы закондар юҡ тип әйтерлек. Мәсәлән, беҙҙең "Хеҙмәт кодексы"нда хатта тотош бүлек ҡатын-ҡыҙҙарҙың хоҡуҡтарын яҡлауға бағышланған. Ошо уҡ хәл башҡа күп кенә закондарҙа ла күҙәтелә.

### Өйрәнә алмаҫлыҡ хәлдәр

Үҙемдең утыҙ йылдан ашыулыҡ эш тәжрибәмдә емерелгән ғаиләләргә, яҙмыштарға, етем ҡалған балаларға шаһит булып һыҙланған саҡтарым бик күп булды. Тәфтишсе булған саҡта атаһы -әсәһен йәки әсәһе атаһын үлтергәндән һуң, ошо тетрәнеүҙе кисергән балаларҙың күҙ ҡараштарын күреү бик ауыр ине. Ундай саҡта атаһын йә әсәһен ҡулға алалар һәм шул минуттан алып балалары үкһеҙ етем тороп ҡала. Шуларҙы күреү бик ныҡ тетрәндерә ине мине. Шулай уҡ енәйәт эштәре буйынса суд процестарында ҡатнашыу ҙа бик ауыр кисерештәр тыуҙыра, уйландыра. Граждандыҡ эштәрен ҡарағанда, мөлкәт, мираҫ бүлгәндә яҡын туғандарҙың кешелек сифаттарын юғалтыуына ла шаһит булырға тура килә. Бындай осраҡта ата - улды, инә ҡыҙҙы белмәй, мөлкәт өсөн бер ҡарында яткан балалар ғүмерлек дошманға әүерелә. Шундай хәлдәрҙе күреп, иҫемаҡылым ҡорой. Нисә йылдар ошондай процестарҙа ултырырға тура килһә лә, өйрәнә алмайым. Өйрәнеп тә булмайҙыр ундайға.

### Аңлы һәм һаҡһыҙ ҡылынған енәйәттәр

1986 йылда мин Башҡорт дәүләт университетының юридик факультетын тамамлағанда диплом эшемдең темаһы эскелектең енәйәттә нисек сағылыш табыуына бәйле ине. Диплом эше яҙыр өсөн архивта ултырып, бик күп енәйәт эштәрен тикшерҙем. Шунда 1985 йылғы эскелеккә ҡаршы кампания башланғандан һуң енәйәтселектең 80-90 процентҡа кәмеүен асыҡланым.

Совет осоронда күп кенә енәйәттәр дөйөм милекте үҙләштереүгә бәйле яһала ине. Бөгөн иһә енәйәттәр шәхес-ара мөнәсәбәт-

***Өсөнсө сәбәп: граждандарҙың юридик яҡтан бөтөнләй наҙанлығы һәм шул белемде алырға ынтылмауы. Күп граждандар хатта юридик консультация алырға кәрәк икәнде лә белмәй. Европа илдәрендә, мәсәлән, һәр кешенең үҙ адвокаты бар. Уларҙа кеше ниндәйҙер бер хәлгә тарыһа, иң тәүҙә телефон аша адвокатынан консультация ала. Адвокат уларҙа бер үк ваҡытта психолог ролен дә үтәй. Ә беҙҙә иһә, эш үткәс, тәфтишсе һорау алғас, кәрәк-кәрәкмәгән аңлатмалар бирелгәс, адвокатҡа илап киләләр. Бындай осраҡта, ысынлап та, эш үткән була һәм ниндәйҙер процестарҙы кирегә бороу йә туҡтатыу бик ауырға төшә, йә бөтөнләй мөмкин булмай сыға.***

# Аҙым... баҫҡан аҙым ул

тәр кимәленә күсте. Алда әйтеп үткән "Банкротлыҡ тураһында"ғы Федераль закон ҡабул ителеүе лә күп кенә енәйәттәргә "йәшел урам" асты. Енәйәтселәр бер ойошма төҙөйҙәр ҙә, уның исеменән күп кенә уғрылыҡ ҡылғандан һуң, шундуҡ ойошманы банкрот тип иғлан итеп, юҡҡа сығаралар. Ошо закон ярҙамында, бер яҡтан, илебеҙҙә күпме колхоз-совхоздар, етештереүсе предприятиелар, завод-фабрикалар юҡҡа сығарылды, икенсе яҡтан, тиҫтәләгән миллионерҙар, миллиардерҙар тыуҙы. Икенсе төрлө әйткәндә, илебеҙҙең закон сығарыусылары илдең башына етә торған закон сығарып, ошо юл менән үҙҙәренең енәйәт эшен йәшерергә тырыша. Хәҙер илебеҙҙә күп граждандар бер маҡсат менән йәшәй: нисек булһа ла, әҙерәк көс һалып, әҙерәк хеҙмәт түгеп, күберәк аҡса эшләү. Күп кенә енәйәттәр хәҙер ошо маҡсатта ла яһала.

## Енәйәттең милләте булмаһа ла…

Енәйәттең милләте булмаһа ла, һәр милләт вәкилдәренең үҙҙәренә генә хас тәртип боҙоуҙары була. Ошо йәһәттән үҙебеҙҙең милләт хаҡында бер-ике һүҙ. Милләттәштәр яһаған енәйәттәрҙең күбеһе тормош-көнкүреш ваҡиғаларына бәйле. Был беҙҙең халыҡтың менталитетынан килә. Ул эскерһеҙ, ихлас, эсендәге - тышында, туп-тура мөнәсәбәтле, хәйләһеҙ, кешегә ышаныусан. Улар тарафынан ҡылынған енәйәттәрҙең күбеһе алдан уйланылмай башҡарыла, үлтереүҙәр ҙә аффект мәлендә йә булмаһа тейешле һаҡланыуҙы арттырыу рәүешендә килеп сыға. Был енәйәттәр күп осраҡта эскелеккә бәйле булыуы күңелде ҡыра.

Милләттәштәребеҙ судҡа барыуҙы, уның тупһаһы аша атлап үтеүҙе енәйәт ҡылған кешеләй ауыр ҡабул итә. Ғөмүмән, совет осоронда йәшәгән быуын кешеләрендә суд иректе юғалтыу, төрмәгә ултырыу, ҙур суммала түләүле булыу ассоциацияһы тыуҙыра. Аллаға шөкөр, әлеге йәштәрҙә бындай комплекстар юҡ тиерлек.

Беҙ, ғөмүмән, күберәк "ярамай" тигәнде тыңлап, шуны үҙебеҙгә һеңдереп үҫкән быуын. Шуға күрә совет осоронда тыуып-үҫеүселәрҙең, шәхес булып формалашыусыларҙың законға мөнәсәбәте лә законды боҙоуҙан ҡурҡыу тойғоһона бәйле. Беҙ "ярамай"ҙы беләбеҙ, әммә "минең хоҡуғым бар" тигән һүҙбәйләнеш хаҡында уйлап та бирмәйбеҙ.

Элегерәк беҙҙең ил халҡы бишйыллыҡтар менән йәшәй торғайны. Ил иҡтисадын үҫтереү йәһәтенән был бишйыллыҡтарҙа рациональ бөртөк, һис шикһеҙ, булғандыр. Шәхси планға килгәндә, йыллыҡ пландар төҙөп йәшәү тормош маҡсатын барлыҡҡа килтерә. Мин үҙем, мәҫәлән, шулай итәм дә, йыл аҙағында үҙ-үҙемә йомғаҡ яһайым. Сөнки алға атламаған бер аҙым - ул кире баҫҡан аҙымға тиң. Хәҙер уҡ, ошо урында, бөгөн йәшәү, йәшәүҙән йәм, ләззәт табыу, үҙ-үҙеңде бәхетле тойоу, шөкөр итеү кәрәк. Шулай уҡ үҙүҙеңде яратыу, ҡайғыртыу, тормош-көнкүреш өсөн комфорт шарттар (уңайлы торлаҡ, ышаныслы автомобиль, сифатлы ризыҡ, яратҡан шөғөл һ.б), үҙеңде ошоларға тулыһынса лайыҡлы итеп тойоу мөһим. Сөнки ошондай кеше үҙен ышаныслы тоя һәм башҡаларға ныҡлы терәк була ала. Юридик күҙлектән сығып ҡарағанда инде, һин бөгөн яҡлаулы булһаң, иртәгәге көнөң дә ышаныслы, әгәр булмаһаң - ҡараңғы.

## Төрмә иерархияһы

Адвокат эшен башҡа закон һаҡлау эштәренә ҡарағанда сауаплыраҡ ғәмәл тип ҡарайым. Уның нигеҙендә кешене яҡлау ята. Кешегә күп осраҡта юридик ярҙам ғына түгел, психологик ярҙам да кәрәк була. Тикшереү эше алып барғанда төрмәлә ултырыусылар үҙенең был хәлен бик ауыр кисерә. Ундай ваҡытта хөкөм ителеүсе күңелендә үҙенең киләсәгенә ҡарата өмөт уятыу мөһим. Төрмәнән сығып, яңынан аяҡҡа баҫып, тулы ҡанлы тормош менән йәшәй башлаусылар ҙа бар. Шуға күрә мин төрмәгә ултырыусыларға был һынауҙың ваҡытлыса икәнлеген, был үлем хәле һәм ҡайғы түгел, ә күңелһеҙ хәл икәнлеген аңлатырға, рухтарын күтәрергә тырышам. Ғөмүмән, былай ҙа ҡыҫҡа ғына ғүмерҙе ситлек артында ултырып үткәреп әрәм итеүҙәренә улар өсөн үкенес хисе кисерәм. Төрмәнең үҙ иерархияһы бар, унда закон буйынса түгел, "тәшөнсәләр" буйынса йәшәйҙәр. Үкенескә ҡаршы, күп осраҡта төрмә кешене тәрбиәләү урынына боҙоп та сығара.

## Тәрбиә мәсьәләһе

Ике ҡыҙ тәрбиәләнем, икеһе лә юрист, өлкән ҡыҙымды кейәүгә бирҙем, бәләкәйе әле юридик факультетта уҡып йөрөй. Балаларыңды үҙеңә бәйләргә тырышыу дөрөҫ булмаған тәрбиә алымылыр, тип уйлайым. Мин үҙем әсәйемә ныҡ бәйле инем һәм уның әхирәткә күсеүен бик ауыр кисерҙем. Атаһына, әсәһенә ныҡ бәйле булған балалар үҙаллы тормошҡа әҙер булмай сыға. Икенсенән, ундай балалар ата-әсәһенең тормоштан китеүен бик ауыр кисереп, һыныуы ла бар. Үкенескә ҡаршы, был донъя шулай ҡоролған: унан бер әҙәм дә тере килеш сыға алмай. Ҡоштар, йәнлектәр, хайуандар донъяһында балаларын үҙаллы тормошҡа әҙерләү хатта инстинкт кимәлендә нығынған. Әйтәйек, ныйырҙар быҙауҙарын имеҙмәй, тибешә башлай, ә ҡоштар себештәрен осорға өйрәтер өсөн ояһынан тибеп төшөрә. Әлбиттә, улар балаларынан һыуынған йә үҙһенмәгән өсөн был юлға бармай. Тәбиғәт уларҙы шулай яһаған. Кешеләр донъяһында инде беҙ был хәлдең нәҡ киреһен күрәбеҙ. Балаларҙы ҡартайғансы әпәүләгәндәр бар. Мин үҙем иһә, ҡыҙҙарымды үҫтереп, белем биреп, оло юлға баҫтырып, башлы-күҙле иткәс, өҫтөмдән төп бурыс төштө, тип иҫәпләйем. Улар үҙ донъяһын үҙҙәре ҡорһон, үҙҙәре фатир алһын, йорт һалһын, балаларын үҙҙәре ҡараһын, ирҙәренә үҙҙәре яраһын. Үҙем инде хәлемдән килгәнсе уларға ярҙамлашырмын, кәңәш бирермен, әммә улар тарта торған йөктө тартмам, тип уйлайым. Кеше үҙаллы йәшәп өйрәнергә, сыныҡырға тейеш.

## Гонаһ енәйәтме?

Әхлаҡ кимәлендәге енәйәттәр ҙә була. Улар өсөн кешене ниндәйҙер закон буйынса яуаплылыҡҡа тарттырып булмай. Шуның өсөн бындай типтағы енәйәттәрҙе гонаһ тип атайҙар. Гонаһ - ул шул уҡ енәйәт, тик Аллаһы Тәғәлә алдындағы енәйәт. Кем белә, бәлки, был енәйәттең иң ҙурылыр. Донъяла гонаһһыҙ бәндә булмай, һәр кеше үҙенең гонаһ ҡылғанын үҙе генә белә. Һәр беребеҙҙең, ҙурмы, бәләкәйме, ундай гонаһтары бар, әлбиттә. Ә бына бындай гонаһ-енәйәт өсөн кеше ниндәй яза алырға тейеш һуң? Минеңсә, бында кешенең үҙ гонаһына ҡарашы ниндәй булыуы мөһимдер. Әгәр ҙә кеше үҙенең кем алдындалыр ғәйебен, гонаһын таныһа, ғәфү үтенһә, ғәйебен аҡлар өсөн ниндәйҙер ғәмәл үтәһә, выждан ғазабы кисерһә, ошонан ғибрәт алһа, гонаһтың язаһы ла үтәләлер, тип уйлайым.

Христиан динендә оло енәйәт ҡылып, закон тарафынан яза алмайынса ҡалып, күңел тыныслығы таба алмаған кеше сиркәүгә килеп, махсус ҡараңғы бүлмәләге шаршау аша дин әһеленә үҙенең гонаһы хаҡында һөйләй һәм ғәфү үтенеүен һорай. Был осраҡта дин әһеле гонаһлы енәйәтсенең кем икәнлеген тауышынан таныған хәлдә лә, закон һағында тороусыларға был хаҡта мәғлүмәт еткермәһә лә, енәйәтте йәшереү тип иҫәпләнмәй. Һәр хәлдә, бының өсөн дин әһеленең үҙен яуаплылыҡҡа тарттырып булмай. Минең эш практикамда дин әһеленең күрһәтмә биреү осрағы булманы. Теоретик яҡтан ҡарағанда, әгәр ҙә дин әһеле үҙ теләге менән судҡа килеп, тауышы буйынса таныған енәйәтсе хаҡында мәғлүмәт бирһә, уның биргән күрһәтмәһе ниндәйҙер ғәйепләүҙәр өсөн нигеҙ була ала, сөнки дин әһеле лә үҙе йәшәгән илдең гражданы бит. Ә инде уны шаһит итеп мәжбүри рәүештә судҡа алып килеү дәүләт менән дин ҡанундарын ҡапма-ҡаршы ҡуйыу булып иҫәпләнер ине.

## Үлем язаһы

Енәйәтсегә үлем язаһы биреү беҙҙең закондан алып ташланды. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, был мәсьәләгә төрлө ҡараш бар. Беренсенән, ысынлап та, яуыз ниәт менән кеше ғүмеренә ҡул һуҙыусының, балаларҙы көсләүсенең был донъяла йәшәргә хоҡуғы бармы? Юҡ! Әммә, дини күҙлектән ҡараһаҡ, үлем ул тормош ауырлыҡтарынан, ғүмер ғазаптарынан ҡотолоу ҙа. Тимәк, үлем язаһын ҡабул итеүсегә был юл менән донъянан китеү "бүләк" кенә. Әгәр ҙә бындай енәйәтсене ғүмерлеккә төрмәгә ултыртып, уның ирекһеҙлек менән ғазапланыуын ғибрәт рәүешендә телевизор аша күрһәтеп барғанда бының иҫ киткес тәрбиәүи әһәмиәте булыр ине. Әммә енәйәтселәрҙе "ғүмерлеккә" төрмәгә ултыртыу язаһы ҡулланылмай тиерлек, ҡулланылһа ла, бик һирәк кенә. Ә инде ауыр енәйәт ҡылыусылар 15-25 йылға хөкөм ителеп, шуның өстән ике өлөшөн ултырһалар, шартлы рәүештә ваҡытынан алда төрмәнән сығыу хоҡуғына эйә. Бындай енәйәтселәр иртәме-һуңмы беҙҙең арала йәшәй башлай һәм йәмғиәтселек өсөн ҡурҡыныс тыуҙыра.

Һуңғы йылдарҙа суицид оло бәләгә әүерелде. Суицидты енәйәт тип атамаһаҡ та, юридик күҙлектән ҡарағанда, үҙ-үҙенә ҡул һалыусы үҙенең ғүмеренә ҡул һуҙыусы ла, үҙе уҡ үҙенең ғәмәленән зыян күреүсе лә. Ошо күҙлектән ҡарағанда, теоретик яҡтан үҙ-үҙенә ҡул һалыусы кешене енәйәтсе тип атарға була. Мин суицидтың сәбәптәрен кешенең тормош ситуацияһы, ауыр проблема алдында көсһөҙлөгөндә күрәм. Беҙҙең илдә был афәттән ҡотолоу өсөн кешенең, шәхестең статусын күтәреү, үҙүҙен йәмғиәткә кәрәкле итеп тойоу зарурҙыр. Дәүләт был осраҡта кешегә гарантия булырға, шарттар тыуҙырырға бурыслы.



***Енәйәтсегә үлем язаһы биреү беҙҙең закондан алып ташланды. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, был мәсьәләгә төрлө ҡараш бар. Беренсенән, ысынлап та, яуыз ниәт менән кеше ғүмеренә ҡул һуҙыусының, балаларҙы көсләүсенең был донъяла йәшәргә хоҡуғы бармы? Юҡ! Әммә, дини күҙлектән ҡараһаҡ, үлем ул тормош ауырлыҡтарынан, ғүмер ғазаптарынан ҡотолоу ҙа. Тимәк, үлем язаһын ҡабул итеүсегә был юл менән донъянан китеү "бүләк" кенә. Әгәр ҙә бындай енәйәтсене ғүмерлеккә төрмәгә ултыртып, уның ирекһеҙлек менән ғазапланыуын ғибрәт рәүешендә телевизор аша күрһәтеп барғанда бының иҫ киткес тәрбиәүи әһәмиәте булыр ине.***

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Юридик консультация ғына булманы Гүзәл Фуат ҡыҙының был ҡыҙыҡлы һәм фәһемле әңгәмәһе. Беҙ унда тормоштоң күп осраҡтарына, ҡатмарлы мәсьәләләренә ҡарата юридик-фәлсәфәүи күҙлектән профессиональ аңлатма ла, донъяуи кәңәш тә таба алдыҡ. Тормошобоҙҙоң беҙ белмәгән һәм күрмәгән яҡтары ла бар икән. Һуғыш менән солох, енәйәт менән закон, аҡ менән ҡара, көн менән төн, һыуыҡ менән йылы уртаһында тороп, беҙҙең мәнфәғәтте яҡлаусыларға хәҡиҡәт асығыраҡ беленә бит инде ул.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ *Ҡыҙғаныҫҡа күрә, бөгөнгө башҡорт бейеүе йәйләп "донъя гражданины"на әүерелә бара, йәғни унда аргентина, испан һәм башҡа халыҡ бейеүҙәренең элементтарын асыҡ күрергә була.*



ИЖАДХАНА



**Быйыл талантлы бейеүсе, бөйөк Моисеевтың уҡыусыһы һәм уның юлын дауам итеүсе, билдәле балетмейстер Фәйзи Ғәскәровтың тыуыуына 100 йыл тулыуҙы билдәләйәсәкбеҙ. Халыҡ ижады өлгөләренә таянып ижад иткән, башҡорт бейеүен фольклор кимәленән профессиональ сәхнә бейеүе юғарылығына күтәргән Фәйзи Ғәскәровтың ансамбле ошо билдәле датаны нindәй уңыштар менән ҡаршылай? Ғөмүмән, башҡорт хореографияһы бөгөн ниндәй хәлдә? Ошолар тураһында бейеүсе, хореограф- балетмейстер, республикала ғына түгел, ә Рәсәй, Европа кимәлендәге спорт саралары, фестивалдәр, ҙур байрам тамашалары режиссер-ҡуйыусыһы булараҡ билдәлелек яулаған, бар ғүмерен башҡорт бейеүен үҫтереүгә, уны һаҡлауға арнаған, Фәйзи Ғәскәров исемендәге Башҡорт дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбленең художество етәксеһе, БР-ҙың халыҡ артисы, профессор Айҙар Хизбулла улы ЗӨБӘЙҘУЛЛИН һөйләй.**

# БЕЙЕҮҘӘРҘӘ - ХАЛЫҠ ФӘЛСӘФӘҺЕ,

## халыҡ күңеленең матурлығы



### Бейеүсенең улы ла бейеүсе

Тыуғандан алып бар ғүмерем башҡорт бейеүе һәм Фәйзи Ғәскәров исемендәге халыҡ бейеүҙәре ансамбле менән бәйле. Ансамбль минең яҙмышым да, тормошом да. Атайым Хизбулла Ғүмәр улы Зөбәйҙуллин менән әсәйем Фая Сәхип ҡыҙы Гәрәева ла ошо уҡ данлы ансамблдең бейеүселәре генә түгел, ә уны ойоштороуға ҙур өлөш һалған кешеләр. Әйткәндәй, минә исемде лә атайымдар Фәйзи Әҙеһәм улының кәңәше менән ҡушҡан.

Һәр артист балаһы кеүек, минә лә сәхнә артында үҫергә тура килде һәм бала саҡ хәтирәләре лә йышыраҡ ошо мәҙәниәт усағы менән бәйле. Ул сакта ансамбль филармония бинаһында урынлашҡайны. Фәйзи Ғәскәров ҡуйған "Төньяҡ амурҙары" бейеүе өсөн кәрәкле реквизиттар һаҡланған һандыҡ әле лә иҫемдә. Ул ваҡытта Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, ансамблдең ветераны Тәлғәт ағай Урманов инспектор булып эшләй ине. Беҙ, бейеүселәрҙең балалары, уны уратып алабыҙ ҙа, күмәкләп, Тәлғәт ағай, зинһар өсөн, һандыҡты ас инде, тип инәләбеҙ. Ул беҙҙе бер ҡыуып ебәрә, ике ҡыуа, ниһәйәт, теләгебеҙ үтәлә: мөғжизәле һандыҡ асыла һәм филармония бинаһы буйлап ҡылыс менән һуғыш башлана.

Атайым Фәйзи Ғәскәровтың рухташы, фекерҙәше, яҙамсыһы булды. Көслө шәхес, лидер ине. Бейеүҙә тап ул башҡорт егете образын тыуҙырған, бар бейеүҙәрҙә лә төп партияларҙа бейегән кеше. Һуңғараҡ үҙемә лә ансамблдең солисы булырға яҙҙы. Аллаһы Тәғәлә беҙҙең ғаиләбеҙгә бер үк яҙмыш биргән: атайым да, әсәйем дә ансамблдең художество етәксеһе булып эшләне, бөгөн мин ошо вазифаны башҡарам. Улар икеһе лә етмеш йәштә, бер үк ваҡытта тиерлек, өс ай айырма менән әхирәткә күстеләр. Ярайһы ғына йәшкә етһәләр ҙә, мин уларҙы иртәрәк киттеләр, тип иҫәпләйем. Эштә үҙен яндырғандар, ғәҙәттә, оҙон ғүмерле булмай шул. Башҡалар кеүек, һәүетемсә, тыныс ҡына ғүмер һөрһәләр, бәлки, тағы ла оҙағыраҡ йәшәгән булырҙар ине, тип уйлаһам да, улар башҡа төрлө йәшәй ҙә алмаҫ ине, моғайын.

Атайым репетитор булып та эшләне. Минә тәүге бейеүҙе лә атайым өйрәтте. Ғәскәров ҡуйған "Тау бөркөтө" ине ул. Ете-һигеҙ йәшлек сағымдан мин уны Мәскәү, Германия сәхнәләрендә бейеп йөрөнөм. Атай булараҡ, бик йомшаҡ кеше булһа ла, эш урынында бөтөнләй икенсегә әүерелә ине. Бер ҡасан да әрләмәне, ҡарашы менән генә бейеүселәрен бер һыҙыҡтан йөрөтөү һәләтенә эйә ине. Профессиональ бейеүсе булараҡ формалашыуымда уның роле ҙур. Мин уҡып бөтөп, ансамблгә килгәндә ул балетмейстер ине, "Зарифа", "Гөлнәзирә", "Еҙ үксә" һәм башҡа бейеүҙәрҙә төп партияларҙы атайым менән эшләргә тура килде. Шулай уҡ хореограф булараҡ та, кеше булараҡ та унан күп кәңәш, фәһем алдым һәм күп нәмәгә өйрәндем, тип әйтә алам. Бөгөн дә уның ҡайһы бер кәңәштәрен иҫкә төшөрәм дә, ансамблдең егеттәренә әрҙәм итеп ебәрергә тырышам. Улым да бейеүсе, балет артисы. Уның тормошона артыҡ ҡыҫылырға тырышмайым, ир-егет үҙе формалашырға тейеш. Шулай ҙа атайым кеүек, мин дә үҙ улыма терәк булырға тырышам. Ә әсәйемә килгәндә, ул минә ныҡ булырға, халҡымды, бейеүҙәрҙе яратырға өйрәтте, илһөйәр итеп үҫтерҙе һәм шуның өсөн дә мин үҙемдең тыуған илемде, халҡымдың ихлас яратам, улар өсөн күп нәмә эшләргә әҙермен.

### "Донъя гражданины"

Ҡыҙғаныҫҡа күрә, башҡорт бейеүенең хәҙерге торошо мине бик хафаға һала. Бөгөнгө башҡорт бейеүе йәйләп "донъя гражданины"на әүерелә бара, йәғни унда аргентина, испан һәм башҡа халыҡ бейеүҙәренең элементтарын асыҡ күрергә була. Был бейеүҙе белмәгән, уны ҡуйыуҙың яуаплылығын тоймаған кешеләрҙең бейеү ҡуйып маташыуынан килеп сыға. Башҡорт бейеүе шундай юғарылыҡта тора һәм уға оло ихтирам менән ҡарарға өйрәнергә кәрәк беҙгә. Стилләштереү, ниндәйҙер яңы хәрәкәттәр уйлап табыу алдынан ун тапҡыр уйлап, бейеүгә зыян килтереүҙән һаҡланыу мөһим.

Шәхсән минә Башҡортостан юлдаш телевидениеһында барған "Байыҡ" проекты оҡшай. Ысынлап та, башҡорт бейеүен һаҡлау, үҫтереү йәһәтенән бындай проекттар һәйбәт, тик унда ҡуйылған ҡайһы бер бейеүҙәрҙе күргәс, аптырап китәһең. Рита Өмөтбаеваға афарин, бик яҡшы эш эшләй. Тик бына хореограф булараҡ, бейеүҙәрҙе баһалаусыларға дәғүәләр белдерер инем. Беренсенән, баһалама ағзаһы булған кеше үҙе художество етәксеһе, һис булмаһа, бейеү ҡуйыусы булырға тейеш. Сөнки шул өлкәлә үҙе нимәлер эшләгән кеше генә был эште бар нескәлегенә төшөнөп аңлаясаҡ һәм ғәҙел баһалаясаҡ. Икенсенән, баһалаусы үҙенең әйткән һүҙе өсөн яуаплылыҡ тойорға тейеш, юғиһә, уйламай әйтелгән фекер ҙә бейеү үҫешен яңылыш юлға бороп ебәреүе бар.

Бына шуның өсөн дә башҡорт бейеүен өйрәнеү, һаҡлап ҡалыу маҡсаты менән ансамбль базаһында йылына ике тапҡыр семинар үткәрәбеҙ. Ошо семинарҙарҙа башҡорт бейеүенең Ғәскәров вариантынан башлап, хәҙерге заманда башҡарылғанына тиклемгә 4-5 төрөн күрһәтергә тырышабыҙ. "Зарифа" бейеүенең 1939 йылғы яҙмаһы менән ансамблдең ветерандары бейегән йәки уны бөгөнгө "Зарифа" менән сағыштырып та булмай, сөнки бейеүсе бейей-бейей оҫтарған кеүек, оҙағыраҡ йәшәгән һайын бейеү ҙә камиллаша бара. Гәүһәр таштың ҡырҙары күберәк булған һайын ул сағыуыраҡ ялтырай бит - бейеү ҙә шулай. Һәр бейеүсенең үҙенең йөҙө, үҙенең күңеле, ул уларҙың барыһын да бейеүгә һала. Хәрәкәттәргә килгәндә лә шулай. Кемдер бейегерәк кәүҙәле, кемдеңдер ҡулдары оҙонораҡ, берәү темпераментлы, берәү лирик. Бер үк хәрәкәт, әйтәйек, лирик бейеүҙә һәм ҡыйыу егеттәр бейеүендә төрлөсә күренергә мөмкин. Бынан тыш, республикала башҡорт бейеүе фестивале үткәреү, бейеүҙәрҙе видеоға төшөрөп таратыу ҙа файҙа бирә.

Атайымдың, бейеүҙе юғары белемле белгестәр һалһын, тигән хыялын тормошҡа ашырырға ла насип булды минә. Республикала әллә күпме коллектив, шундай уҡ һанда художество етәкселәре бар, ә хореографик юғары белем уларҙың 10 процентында ғына. Белемдәре булмаған өсөн дә улар бейеүҙе дөрөҫ ҡуймай бит. Ошоларҙы күҙ уңында тотоп, 2003/2004 уҡыу йылында Көнсығыш иҡтисад, гуманитар фәндәр, идара итеү һәм хоҡуҡ институтында (ВЭГУ) хореографтар әҙерләй башлағайныҡ, хәҙер бер нисә вуҙда бейеү буйынса юғары белем алырға мөмкин. Өфө хореография училищеһында дөрөҫ йүнәлеш алып барыла, унда бейеүселәр төрлө милләттәр хореографияһын да өйрәнеп сыға.

Бейеүҙәге төп хәрәкәттәрҙең үҙгәреүенә юл ҡуйырға ярамай. Мәҫәлән, телгә төрлө сит һүҙҙәр инеп, беҙ уларҙы әүҙем ҡуллана башлаһаҡ, бер нисә йылдан телебеҙҙән бер нәмә лә ҡалмаясаҡ. Бейеүҙә лә шулай уҡ: уны саҡ ҡына үҙгәрттеңме, тарихыбыҙҙы ла, мәҙәниәтебеҙҙе лә юғалтасаҡбыҙ. Әлегә тиклем сит милләттәрҙән, бындай бейеү тыуһын өсөн милләт ниндәй булырға тейеш тә, уның мәҙәниәте ниндәй булырға тейеш, тигән һорауҙарға ниндәй булырға тейеш, тигән һоҡланыу һүҙҙәре генә ишетәбеҙ, артабан да шулай булһын тиһәк, был йүнәлеште контролдә тоторға бурыслыбыҙ.

### Үҙгәрештәр осоро

Быйыл ансамбль нигеҙҙә дүрт проект өҫтөндә эшләйәсәк. Уларҙың беренсеһе - Фәйзи Ғәскәровтың 100 йыллыҡ юбилейына бәйле. Әле Ғәскәров бейеүҙәрен тергеҙеү бара, бының өсөн эшкә ансамблдең ветерандары йәлеп ителгән. Юбилейҙы ноябрҙә үткәрәсәкбеҙ, уға тиклем март айында Мәскәүҙә Чайковский залында концерт буласаҡ.

Бөгөнгө көнгә репертуар йәһәтенән беҙҙең коллектив бик уникаль һанала. Тап ошо үҙенсәлегебеҙ беҙгә төрлө проекттар эшләргә мөмкинлек бирә. Шуларҙың береһе - "Рәсәй - беҙҙең йортобоҙ" тип атала. Ансамбль Рәсәйҙә йәшәгән халыҡтарҙың бейеүҙәре менән Камчатканан башлап Кавказға тиклемге төбәктәр буйлап гастролдәргә сығасаҡ. Рәсәйҙә беҙҙән башҡа был проекты эшләй алған коллективтар юҡ, яҡын киләсәктә лә булмаясаҡ әле. Шулай уҡ быйыл ансамбль "Донъяның төрки телле халыҡтары бейеүҙәре" проектында ҡатнашасаҡ. Әле репертуарҙа ун милләттең бейеүе бар, тағы ике-өс бейеү өҫтәргә тейе ҡалды. Был сараны "Төрксой" үткәрә, ул концерттарҙа бөтөн донъянан солистар ҡатнаша, беҙҙең ансамбль донъя халыҡтары бейеүҙәрен бейейәсәк. Дүртенсе проект - БДБ илдәре бейеүҙәре. Был бейеүҙәрҙең барыһы ла беҙҙең программала бар.

Сер түгел, ансамблдең торғонлоҡ кисергән ваҡыттары ла булды. Уның сәбәптәренә ҡағылмай ғына, шуны әйтергә теләйем: ниндәйҙер уңышҡа өлгәшеү өсөн етәксе менән коллектив араһында ныҡлы бәйләнеш булырға, коллектив етәкселеккә ышанырға тейеш. Ошолай килешеп эшләүҙең һөҙөмтәһе лә бар: беҙ ай ярым эсендә алты яңы бейеү ҡуйыуға өлгәштек, тағы ике яңы бейеү ҡуйылыу өҫтөндә. Хәҙер йылына 10-12 яңы бейеү сығарырға тигән маҡсат менән эшләйбеҙ. Яңы программа өҫтөндә эш башланды. Был, әлбиттә, коллектив йәшәй, тигәнде аңлата. Иң мөһиме, ансамблдә барған үҙгәрештәр бейеүселәргә лә оҡ-

шай, улар бар көсөн һәм ҡеүәтен һалып хеҙмәт итә. Былтыр декабрҙә Өфө тамашасыһы хөкөмөнә яңы бейеүҙәрҙең ҡайһы берҙәрен күрһәттек, тамашасылар әйтеүе буйынса, ансамблдә әле үк яңы һулыш һиҙелә. Йәш солистар, йәш бейеүселәр күҙ алдында күтәрелә, быныһы ла ҡыуандыра. Бөгөн Фәйзи Ғәскәров исемендәге халыҡ бейеүҙәре ансамбле Рәсәйҙең иң яҡшы коллективтары иҫәбендә.

### Ул театр тамашаһы кеүек

Башҡорт бейеүе ул ябай хәрәкәттәр йыйылмаһы ғына түгел, ә тотош бер театр тамашаһы. "Бүләк", "Ҡороҡсолар", "Өс таған" - ниндәй бейеүҙе генә алма, һәр бер биҙәктә, һәр бер хәрәкәттә образ бар. Бынан тыш, һәр береһенә фәлсәфәүи мәғәнә һалынған. Әйтәйек, "Өс таған" (халыҡта уны яңылыш "Өс туған" тип атап йөрөтәләр) - донъяны тотоп тороусы өс быуынды символлаштыра. Унда ысынлап та халыҡ фәлсәфәһе - кеше ғүмеренең йәшлектән алып ҡартлыҡҡа тиклемге этаптары айырылғыһыҙ берлектә күрһәтелә. Һәр осорҙоң үҙ матурлығы, үҙ мәғәнәһе. Был бейеүҙә йәш кешенең батырлығы ла, сослоғо ла, йәшлеге лә, ир ҡорона ингән ир-аттың олпатлығы ла, тотанаҡлығы ла, баҫалҡы көсө лә, ҡарттың аҡылы һәм шаянлығы ла бар. Фәйзи Әҙеһәм улы шуға ла "Өс таған бер ҡасан да таймаясаҡ, ҡоламаясаҡ", тип, күмәк һәм дуҫ булыуҙың ни тиклем мөһим икәнлеген күрһәткән. Бына шуның өсөн дә башҡорт бейеүе хәҙерге заманда лайыҡлы рәүештә иң бай һәм боронғо бейеүҙәрҙән һанала. Ә Фәйзи Ғәскәров бейеүҙәрҙе сәхнәләштергәндә уны тотош бер театр итеп ҡуйыу оҫталығына эйә талант булған да инде.

Ғәскәров ансамбль төҙөгән саҡта бейеүселәрҙе төрлө төбәктәргә йөрөп йыйған. Хореография училищеһында халыҡ бейеүе бүлеге асылған ғына ваҡытта районларға сығып студенттарҙы үҙебеҙ йыя торғайныҡ. Әле был матур йоланы тағы тергеҙергә уйлайбыҙ, училище менән һөйләшкәнбеҙ, яҙ районларға сығып, һәләтле һәм рухлы егеттәрҙе, ҡыҙҙарҙы һайлап аласаҡбыҙ. Физкультура менән шөғөлләнеү өсөн артыҡ аҡыл кәрәкмәй, ә һәр хәрәкәтте тамашасыға еткереү, уны образ менән тулыландырыу өсөн бейеүсенең күңеле лә матур, үҙе лә рухлы булыуы мөһим. Әлбиттә, состав, башҡарыусылар яңырып торорға тейеш. Һәләтле йәштәрҙе йәлеп итеү өсөн уларға лайыҡлы эш хаҡы түләргә, йәшәргә урын бирергә кәрәк. Һуңғы осорҙа мөмкинлек табып, бейеүселәрҙең хеҙмәт хаҡын бер аҙ күтәрә алдыҡ, Мәҙәниәт министрлығы ла ярҙам итте. Ансамблдең иҫәбенә фатирҙарҙы арендаға алып, уларҙы унда бушлай йәшәтәбеҙ. Башҡа академик исемен йөрөтөүсе ансамблдәр бейеүселәренең эш хаҡы 30 мендән 60 меңгә тиклем булыуын иҫәпкә алғанда, был ярҙам диңгеҙҙәге бер тамсы ғыналыр, шулай ҙа бейеүселәргә шарттар тыуҙырылырға тейеш, тип уйлайым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөтөн донъя Фәйзи Ғәскәров исемендәге халыҡ бейеүҙәре ансамбле бейегән классик башҡорт бейеүҙәрен аяғүрә тороп алҡышлағанда, башҡорт халҡының мәҙәниәте менән һоҡланған ваҡытта, башҡорт бейеүе үҙенең асылын юғалтырға тейеш түгел. Айҙар Хизбулла улы әйтмешләй, бейеүҙәребеҙ юғарылығына күтәрелеп, уға ихтирам һәм оло яуаплылыҡ менән ҡарайыҡ. Ғәскәровтың юбилейы йылы - башҡорт бейеүе йылы халыҡ фәлсәфәһе, рухы ярылып ятҡан яңы бейеүҙәргә бай булһын ине.**

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

# КИЛӘСӘГЕБЕҘГӘ АЯҠ САЛЫНЫР...

## китап, гәзит уҡымаһаҡ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



**Хәсән НАЗАР, шағир, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты:** Бөгөн халыҡтың үтә битарафлығы ҡыҙғаныс хәл. Тыуған төйәгебеҙгә, тимәк, үҙ яҙмышыбыҙға ғәмһеҙ ҡарауыбыҙ борсой мине. Башҡортостаныбыҙҙың байлыҡтары таратыла. Тотош сәнәғәт тармаҡтары сит-ят ҡулдарға күсеп бөтөп бара. Ер мәсьәләһендә лә беҙҙең халыҡ вайымһыҙ. Әле булһа үҙенә тейешле ер пайҙарын теркәп, үҙ ҡулына алып бөтә алмай. Ләкин матди проблемаларҙан бигерәк, рухи яҡтан ярлылана барыуыбыҙ хәүефле. Тормош-көнкүрештә яфа сигеүебеҙ ана шул рухи упҡынға тәгәрәүебеҙгә бәйле бит инде. Халыҡтың күпселек өлөшө өҫ бөтөн, тамаҡ туҡ булһа, шул еткән, тип кенә йәшәүгә күсеп бөтөп бара түгелме? Донъя бөтәйтеү, етеш тормошҡа ынтылыу бар ваҡытты ала, ҡалғанына мөмкинлек тә юҡ, тип әйтеүселәр булыр. Ләкин етеш тормошто рухи байлыҡһыҙ күҙ алдына килтерә алмайым мин.

Телебеҙҙең яҙмышы инде күпме йылдар ҡыл өҫтөндә эленеп тора. Төп сәбәптәрҙең береһе - туған телен ҡайғыртырға тейешле чиновниктарҙың, район башлыҡтары, ауыл етәкселәренең ватып-емереп ярым русса, ярым башҡортса сығыш яһауҙарында, тип иҫәпләйем. Уларҙың телгә ҡарата ошондай мөнәсәбәте халыҡҡа, йәштәребеҙгә кире өлгө булып тора. Әҙәбиәттең халыҡҡа бөтә байлығында барып етә алмауы ла хәүефләндерә. Китаптар бик аҙ сығарыла, шуларҙың бармаҡ менән генә һанарлыҡ өлөшө ауылдарға еткерелә. Бөгөн яҙыусылырҙы, шағирҙарҙы белеп бөтәләрме, уҡып баралармы? Быға мин бик ныҡ шикләнәм. Әлбиттә, мәктәптәрҙә әҙәбиәт дәрестәре уҡытыла. Ләкин йәш, урта быуын әҙәбиәтебеҙҙән, сәнғәтебеҙҙән ситтә тора кеүек, миңеңсә. Милли матбуғатҡа мөнәсәбәтебеҙ һүлпәнәйә барыуы ла туған телебеҙҙә уҡымауыбыҙҙың, битараф булыуыбыҙҙың бер күренеше.

Һөҙөмтәләре бөгөн бик үк һиҙелмәһә лә, бөгөндән үк киләсәгебеҙгә аяҡ салына. Сөнки милләттең моңо - йырҙарҙа, милләттең заңы - шиғриәттә, әҙәбиәттә, ә милләттең аңы - матбуғатта. Бына шул аңыбыҙҙы, айырыуса үҙаңыбыҙҙы үҫтереү йәһәтенән матбуғатҡа иғтибарҙы көсәйтергә кәрәк. Гәзит-журналдарға көсләп яҙҙыртыу хаҡында түгел һүҙем, һәр кем үҙе аңлап эш итергә тейеш. Беҙҙең идеябыҙ, идеологиябыҙ берәү генә - ул милләтебеҙҙе һаҡлау, телде һаҡлау, республиканы һаҡлау. Ошо йәһәттән матбуғатыбыҙҙың әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ.

*ЙӘШ ШАҒИР АУАЗЫ*

# БУЛМАҺА ЕРҘӘ ТАЛДАР,

## Булмаҫ ине имәндәр

*Ринат СӨЛӘЙМӘНОВ.*

**Нимә ул шиғриәт? Уға аныҡ ҡына яуап юҡ. Бер шиғырымда әйтелеүенсә, шиғриәт - аҡыл менән хистәрҙең ҡауышыуы, йыһандағы көстәрҙең йәшерен тәьҫире, ул - күңел сәйәхте, йөрәк сәйәсәте, йөрәк емеше. Ысын шағир бар булмышын шиғриәткә бағышларға тейештер, тип уйлайым. Ундайҙар арабыҙҙа бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Рәшит Назаров, Рәми Ғарипов, Рәйес Түләк, Салауат Әбүзәр... Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙ, шиғриәткә ғашиҡтар, ваҡыт юҡлығына һылтанып, ижад донъяһына йәнтәнебеҙ менән бирелеүҙән азатбыҙ. Ә бит саф шиғриәт тап шуны талап итә.**



* * *

Талдай шыйыҡ тимәгеҙ,
Донъя йөгө иңемдә.
Булмаһа ерҙә талдар,
Булмаҫ ине имәндәр.

Имәндәй булһам, йөктө
Күберәк тейәр инем.
Ундай яуаплылыҡты
Яҙмышым, тиер инем.

Шулай ҙа был тормошта
Имәндәй талдар осрай.
Ә ҡайһы бер имәндәр
Талдай нескәлек аҫырай.

Талдай талған саҡтарҙа
Имәндәргә таянам.
Кителгән таш түгелмен
Төйәк иткән ҡаянан.

Тамырҙарыма минең
Ерем ҡеүәте күскән.
Шуға имәндәй рухым,
Күңелем талдай нескә.

* * *

Дөрөҫлөккә тура ҡарау бит ул -
Башты тығыу ҡылыс аҫтына.
Тик барыбер шуға ынтыламын,
Тыйып ҡара мине, аҫ, туна.

Салауаттар, Вәлидиҙәр ҡаны
Ҡайнап тора ҡайнар йөрәктә.
Ирәмәлдең имәндәрен йыҡҡан
Айыу көсө талмаҫ беләктә.

Ә рухыммы? Рухи ынтылышым
Бөркөт осор үрҙән юғары.
Ағиҙелдәй тымыу белмәҫ үҙем,
Юҡ иренеү миндә, юҡ арыу.

Салауат ҡылысылай үткер телем,
Әйткән һүҙем уҡтай ҡаҙалыр.
Ҡарашымда - бөркөт ҡарашы,
Унан гөл-сәскәләр наҙ алыр.

Сәскәләр ҡояшҡа үрелгәндәй,
Һәр саҡ дөрөҫлөккә ынтылам.
Олатайҙар рухы йөрәгемдә -
Мин хәҡиҡәт менән бер туған.

* * *

Урал бөркөттәре оса
Ҡосоп азатлыҡты.
Асыҡ күктән өмөт тулы
Йылы наҙ атлыҡты.

Ап-аҡ ҡайын йәшел яулыҡ
Болғай зәңгәр күккә.
Бер йырлайым "Буранбай"ҙы,
Ул моңлораҡ күпкә.

Үткәндәрҙе онотorға
Сарам юҡ бөгөн.
Янып барған йөрәгемә
Дауа - түҙемлегем.

Ағиҙелдең тулҡынына
Ҡарап тулҡынланам.
Имәндәрем көйләй төҫлө:
"Һынма, ныҡ бул, балам!"

Һынмаҫ рухым йөрәгемдә
Йәшәй халҡым моңо.
Күҙҙәрендә сағыламы
Атыр бәхет таңы!

Урал бөркөттәре оса
Ҡосоп азатлыҡты.
Әллә беҙҙең хыялдармы
Иркен ҡанат ҡаҡты?

### Туған тел

Туған телем! Һәр бер һүҙең
Ҡолаҡты иркәләр моң.
Һинән татлы, һинән баллы
Тел донъяла бармы һуң?

Быуаттарҙа сыныҡҡан тел,
Яу сапҡан тел, еңгән тел.
Зиһенемә әсә һөтө,
Наҙы менән һеңгән тел.

Туған телем! Һәр бер һүҙең
Күгәрсен һөтө генә.
Тауҙарҙы уятҡан йыр һин,
Дауа йән һүтегенә.

Туған телем! Һәр бер һүҙең
Аҫыл шиғырҙың үҙе.
Мостай теле, Бикбай теле,
Вәлиди, Рәми һүҙе.

Туған телем! Ах, хуш еҫең
Гөл-сәскәнән, ылыҫтан...
Шәкәрҙән шәрбәтлерәк һин,
Үткерерәк ҡылыстан.

Туған телем! О, мөғжизә!
Һәр һүҙеңдән бал тама.
Илемдең ғорурлығы һин,
Ал таңдағы тантана.

*✓ Һуттарҙың составында шәкәр күп, шуға ла күп күләмдә һут эсеү һөҙөмтәһендә һуңғы осорҙа балалар араһында диабет сиренә дусар булыусылар ҙа арта бара.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ЕМЕШ ҺУТЫ...

## файҙалы эсемлек түгел

■ Баланы бәләкәй саҡтан һуттарға, емеш-еләк коктейлдәренә, смузиға, пакетлы какаоға өйрәтеү дөрөҫ түгел, ти Британия ғалимдары. Бала саҡтан татлы һуттарға өйрәнгән кеше ҙурайғас та планеталағы иң файҙалы эсемлекте - ябай һыуҙы эсмәйәсәк. Был тештәр өсөн дә ҙур зыян килтерә. Стоматолог Кэтрин Харили белдереүенсә, емеш-еләк һуттары һәм коктейлдәре, ғәҙәттә, үтә әскелтем була, уларҙа pH кимәле 2-нән 3-кә тиклем. Ә ауыҙ уртында әселек кимәле 5,5-тән түбәнерәк булған һайын, тештәр "кислота атакаһы"на дусар була. Ата-әсәләр балаларҙың тештәре боҙолмаһын өсөн уларҙы артыҡ шоколад ашауҙан тыя, ә һуттарҙың хәүефе тураһында бер нәмә лә белмәй. Бында телевидениела барған рекламалар ҙа "ғәйепле", сөнки уларҙа һуттар сәләмәтлек өсөн файҙалы эсемлек булараҡ һүрәтләнә. Һуттарҙың составында шәкәр күп, шуға ла күп күләмдә һут эсеү һөҙөмтәһендә һуңғы осорҙа балалар араһында диабет сиренә дусар булыусылар ҙа арта бара.

■ Тормоштағы хәлдәрҙе тик насар яҡтан ғына күргән һәм киләсәктә лә ыңғай ваҡиғалар булырына ышанмаған кешеләрҙе тәбиғәт үҙе шулай итеп яралтҡан, имеш. Америка ғалимдары асыҡлауынса, бындай кешеләрҙең баш мейеһендә невропептид Y (NPY) тип аталған үҙенсәлекле матдә түбән кимәлдә. Мичиган штаты университетының ғилми хеҙмәткәрҙәре тикшеренеү барышында организмға тап ошо матдә молекулаларының етешмәүе һөҙөмтәһендә кеше стресҡа ҡаршы көрәшмәй, тигәнде асыҡлай. NPY кимәле нәҫелдән килеүен иҫәпкә алғанда, "пессимист булып тыумайҙар, пессимисҡа әйләнәләр" тигән билдәле әйтемде "пессимист булып тыуалар" тип үҙгәртеү ҙә дөрөҫ буласаҡ, тип яҙа Лондондың "Дейли телеграф" гәзите.

■ Корнуолл университеты (АҠШ) ғалимдары асыҡлауынса, балалар төҫлө һауыт-һабанан яҡшыраҡ ашай. Мәҫәлән, ете төрлө предмет һүрәтләнгән, ете төрлө төҫкә буялған тәрилкәнән бала хатта брокколи йәки балыҡты ла теләп ашаясаҡ. Шуға балағыҙҙың аппетитына йоғонто яһайым тиһәгеҙ, сағыу тәрилкәләр һатып алығыҙ. Әйткәндәй, былтыр Британияның Tesko компанияһы балалар яратмаған төҫлө кәбеҫтәне ысын мәғәнәһендә төҫлө яһап, шәмәхә, һары, йәшел төҫтәргә "буяған". Бының өсөн төҫлө кәбеҫтәне башҡа төрлө кәбеҫтәләр, шул иҫәптән брокколи менән һеркәләндергәндәр.

■ Белгестәр иҫәпләп сығарыуынса, офис хеҙмәткәрҙәренең дүрттән бер өлөшө хроник күңел төшөнкөлөгөнән яфалана икән. Бындай саҡта уларға ҡәһүә һәм шоколад ярҙамға килә. Британия тикшеренеүселәре офистарҙа эш көндәре нисек үтеүен өйрәнеп, эш урынындағы төшөнкөлөктөң хеҙмәткәрҙең хеҙмәте сифатына ғына түгел, ә физик һәм психик сәләмәтлегенә тәьҫир итә икәнен асыҡлаған.102 хеҙмәткәрҙән һорау алғандан һуң, уларҙың ҙур ғына проценты был төшөнкөлөктө ҡәһүә эсеп йәки шоколад ашап "баҫа", уларҙың ҡайһы берҙәре эш көнөнән һуң спиртлы эсемлектәр ҡуллана икәнлеге асыҡлана. Эште күңелле итеп алып барған, хеҙмәткәрҙәр бер-береһе менән йыш аралашҡан коллективтарҙа бындай хәл һирәк осрай, ти тикшеренеүселәр. Шулай уҡ етәксе талапсан булған урындарҙа ла хеҙмәткәрҙәрҙең күңелһеҙләнеп, төшөнкөлөккә бирелеп ултырырға ваҡыты юҡ.

О, СПОРТ!

**Бер егет һабантуйҙа йыл һайын тәкә ала ла ҡайта, ала ла ҡайта, ти. Үҙе көрәштән дә, ҡыуалға менеүҙән дә, ҡолғаға үрмәләүҙән дә, йүгереүҙән дә берҙәй шәп икән. Ауылдаштары был егеттең уңыштары серен белә алмай йонсой: нисек итеп бөтөн ярыштарҙан да беренсе булырға мөмкин? Кемдер көнләшкән, кемдер һоҡланған егеткә. Ә ул ҡәҙимгесә йәшәй биргән - ауылдаштарының көнләшеүе, һоҡланыуы тураһында белмәгән дә, был турала уйларға ваҡыты ла етмәгән. Ниндәй сере булған был егеттең? Спортта иҫ киткес һөҙөмтәләргә ирешер өсөн ниҙәр кәрәк: тәбиғәттән бирелгән атлетик тән ҡеүәтеме? Бының өсөн ата-әсәйең спортсы булырға тейештер, бәлки? Ошондайыраҡ һорауҙар мине Сибайҙағы бер көрәш ярышына алып килде. Бында әзмәүерҙәй ике егет менән таныштым. Тәүгеһе - Бөрйән районы Байназар ауылы егете Илшат ҒӘЗИН. Уның бөтә ағалары ла профессиональ көрәшсе. Барыһы ла, шул иҫәптән Илшат та, спорт мастерлығына кандидат. Икенсе әңгәмәсем - сығышы менән Йылайыр районы Сәләх ауылынан, шулай уҡ спорт мастерлығына кандидат, көрәш буйынса тренерлыҡ итеп тә, уҡып та, үҙе лә уҡытыусы булып эшләп өлгөрөүсе Айҙар БАЙСУРИН. Егеттәр икеһе лә бер йылғы, икеһе лә бер үк ваҡытта көрәш түңәрәгенә йөрөй башлаған, әлеге мәлдә БДУ-ның Сибай институтында Физик культура һәм спорт факультетында белем алалар. Көрәш ваҡытында һорауҙар төйөнөн тағатып, икеһе менән ихлас ҡына әңгәмәләшеп алырға форсат тейҙе.**



# МИЛЛИ КӨРӘШ...

## һәр башҡорт сәмендә



### Нәҫелдәре менән көрәшселәр

Бөрйән егете әйтеүенсә, спортһыҙ йәшәй алмай ул. "Көрәш - Ғәзиндарҙың ҡанында", - ти. 12 көрәшсе, етмәһә, бөтөнөһө лә спорт мастерлығына кандидат тәрбиәләгән нәҫелдең башҡаса булыуы ла мөмкин түгелдер. Күп ғаиләләр бындай уңыш менән маһая алмай бит. Көрәшсенән: "Һеҙҙең арала кандидат булмағандар бармы һуң улай булғас?" - тип, уйынлы-ысынлы һорайым. Ул: "Юҡтыр, бәлиғ булғандар - барыһы ла мастерлыҡҡа дәғүә итә. Бәләкәй ҡустым тиҙҙән шулай уҡ ағалары юлына баҫмаҡсы, ул да һынатмаҫ, тип көтәбеҙ", - тип яуапланы.

"Егет кеше бар нәмәгә лә маһир булырға тейеш", тип һанай ул. Шуға күрә үҙе лә төрлө мәҙәни сараларҙа ҡатнашып өлгөрә. Бер һүҙ менән әйткәндә, батыр ҙа, сәсән дә! Ҡумыҙҙа ла уйнай, бейей ҙә, йырлай ҙа... Былтыр "Салауат йыйыны"нда "Йыйын батыры" исемен яулауы, Баймаҡта үткәрелгән "Ирәндек батыры"нда 3-сө урынға сығыуы, быйыл Әбйәлил районында "Төнъяҡ амурҙары" клубы үткәргән йыйында көрәш, бейеү, үҙ-үҙең менән таныштырыуҙа еңеп сығыуы ошо хаҡта һөйләй. Күптән түгел Октябрьский ҡалаһында үткән көрәш буйынса республика ярышында ла өсөнсө урын яулаған Илшат. "Әлеге мәлдә иң ҙур еңеүем - былтыр Ҡаҙанда үткән көрәш буйынса ил беренселендә 3-сө урынға сығыуым", - ти йәш батыр. Һүҙен йомғаҡлап, Бөрйән егете үҙенең уҡытыусыларына - ике туған ағаһы Йәҙгәргә һәм тренеры Геннадий Михайлович Полькоға, шулай уҡ сәсәнлек серҙәренә төшөнөргә ярҙам итеүе өсөн сәсәниә Асия Солтан ҡыҙы Ғәйнуллинаға рәхмәтен еткерҙе. Күренеп тора: егет көрәшкә ныҡлы аҙымдар менән килә. Янында терәге - көрәшсе ағай-энеләре булыуы уға рухи көс өҫтәгәндәй тойола.

### Көрәшсегә сик юҡ

Илшат атлы батырҙы майҙанға көрәшкә саҡырҙылар, ә беҙ үҙебеҙҙе борсоған һорауҙарҙы Айҙарға бирҙек. Айҙар быйыл юғары уҡыу йортон тамамларға йыйына икән. Бер үк ваҡытта ҡаланың 12-се һанлы мәктәбендә лә уҡыта, Сибай педагогия колледжында көрәш буйынса түңәрәк тә алып бара. Уның фекеренсә, көрәште аңлауы бик ҡыйын. Һәр бер нәмәне тулыһынса төшөнөп бөтөп булмай, шуға күрә оҫталыҡҡа шөғөлләнә-шөғөлләнә, еңәеңелә өлгәшә спортсы. Әңгәмәсебеҙ билдәләүенсә, кеше өсөн сиктәр юҡ: ул һәр ваҡыт үҫә, алға бара. "Был кеше минән алдараҡ чемпион булды ла ҡуйҙы бит әле, тимәк, мин уны бер ваҡытта ла еңә алмаҫмын инде", - тип уйлау, ҡурҡыу, ғөмүмән, дөрөҫ түгел: тырышлыҡ кәрәк. Спортта ғына түгел, тормошта ла ошо принцип менән йәшәй белеү - ул ҙур оҫталыҡтарҙың береһе. Ғәҙәттә тап ошо һәләткә эйә булған кешеләр генә рухи һәм матди үрҙәргә барып етә",- ти егет.

Айҙарҙың фекерен ҡеүәтләп, уның бала сағы, спортҡа нисегерәк килеүе тураһында белешәбеҙ. "Үҙемдең ауылда 4 йыллыҡ башланғыс мәктәпте тамамлағас, Йомағужа мәктәбенә 5-се синыфҡа килдем дә, көрәшкә яҙылдым. Беренсе тренерым Миңлеғәле Ғилман улы Ҡолһарин етәкселегендә шөғөлләндем", - тип, ҡыҫҡа һәм аныҡ итеп яуап бирҙе Айҙар үҙенең көрәшкә тәү аяҡ баҫҡан сағын.

Тренер булараҡ, Айҙар һәр спортта ла осрай торған дөйөм нескәлектәр тураһында әйтеп үтте. Спортта, шул иҫәптән көрәштә лә, дәғүәсеңде өйрәнеп, уның етешһеҙлектәрен тотоп алып, көсһөҙөрәк урынын тойоп, һөжүмде шуға ҡарап ҡорорға була икән. Шулай уҡ кемделер "Һин кил әле, ә һин килмә", тип күнекмәләргә йөрөтөп, көрәшсе яһап булмай, тигән фекерҙә егет. "Минең түңәрәккә лә кем теләй, шул ғына йөрөй", ти ул йылмайып. Балаларҙың һаулығы ла, физик әҙерлеге лә төрлөсә булғанға күрә, көрәшкә һәр баланы айырым өйрәтергә тырыша йәш тренер.

Айҙарҙың үҙенә генә ҡағылышлы һорауҙар ҙа бирҙек. Үҙе тураһында Йылайыр егете: "Рәсәйҙең иң көслө кешеһе, милләттәшебеҙ Эльбрус Нигмәтуллинды өлгө итеп алғанмын. Уға тәбиғәттән бирелгәнме көс, әллә үҙе шөғөлләнеп барып еткәнме был бейеклеккә - әйтә алмайым, әммә хайран ҡалам. Уҡытыу менән дә, тренерлыҡ менән дә бер ыңғай шөғөлләнгәнгә күрә үҙемә ваҡыт ҡалмай. Шуға күрә Рәсәй кимәлендәге ярыштарҙа ҡатнашып, еңеү тураһындағы уйым - әлегә хыял ғына", - тине.

Артабан егет көрәштең үҙенә айырым туҡталды. Йәш тренер һүҙҙәренә ҡарағанда, көрәш спортсының төрлө яҡтан үҫешкән булыуын, атап әйткәндә, аяҡтарҙың да, билдең дә, ҡулдарҙың да, яурындың да көслө булыуын талап итә. Дәғүәсе һине таҫтамал менән һығып, шаҡарғанға күрә, иң күп көс билгә төшә. "Әҙерлегең етерлек түгел икән, бил шунда уҡ бирешә. Ул сағында инде, бөйөрҙәргә түҙемлек бирһен, малай, түҙеп кенә тор!" - ти спорт мастерлығына кандидат. Көрәшсе кәңәш иткәнсә, бөйөрҙө һаҡлар өсөн биленде нығытыу талап ителә. Бөйөрҙө егет тиҙ ыуала торған фарфор менән сағыштырҙы: "Ыуалсыҡ әйбер - фарфорҙы ҡалын туҡыма менән ураһаң, ташлаған саҡта ул ярылмай, сатнамай, йәнселмәй бит, мускулдар менән уратып алынған булһа, кешенең бөйөрө лә бирешмәй".

"Көрәшсе булыр өсөн ниндәй кәүҙәле булыу, ғөмүмән, ниндәй сифаттарға эйә булыу яҡшыраҡ?" тип, майҙанға атлыҡҡан әңгәмәсебеҙҙән һорауыбыҙға, күнекмәләр эшләүенән туҡтамайынса ғына, былай тип яуап бирҙе: "Минеңсә, ниндәй кәүҙәле булыуға бәйләнмәгән ул: оһолло йәғни йылғыр булыуыңа бәйләнгән көрәштәге уңыш. Нәҙек билле Рәсәй чемпиондары ла, имәндәй ныҡ билле урта ҡул спортсылар ҙа осрай бит", - тип, майҙанына ашыҡты.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ни өсөн спортсыларҙың улдары шуҡ була? 12 спорт кандидаты тәрбиәләнгән Ғәзиндар ғаиләһенең ниндәйҙер йәшерен сере бармы? Кем асыр был серҙе? Ә Айҙар атлы егетте атаһы көрәшкә етәкләп килтермәгән - малай үҙе килгән түгелме? Спорт һайлап алынған йәки айырым бер кешеләрҙең генә эше, һөнәре түгел - ул барыһының да сәләмәтлек сығанағы. Йәғни, ниндәй ауыр тойолған көрәш менән дә кем теләй, шул шөғөлләнә ала. Бәйәнебеҙҙең башында ауылда һабантуй ярыштарында гел беренселекте алған егет тураһында әйтә биргәйнек. Һәр ауылда, һәр ҡалала бар ундайҙар. Уларҙың серенә төшөнөүҙе уҡыусыбыҙҙың үҙенә ҡалдырырға булдыҡ.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК

## Балалар тураһында

**Юғары тирбәлеш шарттарында ныҡ һәләтле балалар тыуа. Мәҫәлән, 2009 йылда "Жизнь" гәзите Норильскиҙа тыуғас та уҡ һүҙҙәрҙе аңлаған, үҙе лә уларҙы ҡабатлаған (атай, әсәй һ.б.), бер айлыҡ сағында арҡаһынан эсенә әйләнеп ятыусы малай тыуыуы хаҡында яҙғайны.**

Бәләкәй бала - юғары әхлаҡи йән эйәһе! Әммә матди донъяға күсеү улар өсөн ҙур стресс, сөнки улар үҙаллы йөрөй ҙә, һөйләшә лә алмай. Әммә улар күптән түгел генә Аллаһ янынан ҡайтҡан. Шуға ла бәләкәй бала менән аңлы рәүештә, ололар менән һөйләшкән кеүек, һәр һүҙҙе асыҡ, аныҡ әйтеп һөйләшергә кәрәк!

Бер ғаиләлә икенсе бала тыуа. Өс йәшлек ҡыҙ ата-әсәһенең бүлмәнән сығып тороуын үтенә һәм бәпес ятҡан карауат эргәһенә килеп: "Һаумы, бәпес, Аллаһ унда нисек йәшәй? Юҡһа, мин онота башланым!" - тигән.

Бала тыуғас та ярты сәғәт эсендә уны имеҙергә кәрәк. Был бик мөһим, сөнки ыуыҙ баланың артабанғы иммунитеты үҫешен тәьмин итә!

Балаға синтетик әйберҙәр кейҙермәгеҙ. Бөтөн нәмә энергия һәм мәғлүмәт менән бәйләнгән, синтетик туҡыма көс ҡулланыу юлы менән булдырылған, шуға күрә ул кире энергетика йөрөтә.

Беҙ барыбыҙ ҙа тире аша тын алабыҙ. Әгәр уны елем йәки буяу менән ҡаплаһаҡ, кеше аңын юғалтасаҡ. Бына ни өсөн балалар синтетик колготкиҙарын сисеп ырғыта. "Һин бәләкәй түгел", тип оялтырға тырышыу файҙаһыҙ, әгәр тәне тын алмай икән, бала нимә эшләргә тейеш?

Натураль туҡымаларҙан: мамыҡ, етен, ебәк һәм йөндән етештерелгән әйберҙәр кейҙерегеҙ балаларығыҙға. Мамыҡ ҡуышта, Аллаһтың энергияһына ҡыуанып, киндән үҫкән һәм ыңғай энергия йөрөтә.

Бәләкәй балалар һыуыҡҡа сыҙам һәм уларҙың иммунитеты юғары, камил. Тимәк, улар ололарға ҡарағанда йылы кейемдә кәмерәк кейергә тейеш. Күп кенә ата-әсәләр үҙҙәре бер ҡат күлдәктә йөрөй, ә балаларын ҡат-ҡат кейендерә. Шулай итеп уларҙың иммунитетын боҙа.

Бик бәләкәй саҡтарынан алып балаларҙы, йыуындырғандан һуң, бер нисә секунд һалҡын душ аҫтында торорға кәңәш ителә. Бала ҡурҡмаһын өсөн тәүҙә һыуға аяҡ табандарын ғына тейҙерегеҙ, икенсе тапҡыр баштан аша ҡойондороғоҙ һәм матур, ҡыуанынслы һоҡланыу һүҙҙәре әйтегеҙ. Балалар менән шулай уйнағыҙ - был бик файҙалы. Беренсенән, стресс ваҡытында организм илаһи кодҡа яраҡлылыҡҡа тест-контроль үткәрә һәм барлыҡ организм туплаһып, уҙ-үҙен илаһи гармония һәм камиллыҡ торошона килтерә. Икенсенән, был аҡыл һәләтен стимуллай. Өсөнсөнән, тирбәлеште арттыра, көсөргәнеште кәметә, күнелде күтәрә. Тимәк, бала сәләмәт, һәләтле булып үҫә.

Балалар үҫә башлағас, үҙҙәре үк һыуыҡ һыу аҫтында оҙағыраҡ тотоуҙы һорай - был иҫ китмәле торош уларға бик оҡшай.

Көслө һыҡҡылау ҡулланып, массаж эшләгеҙ (теләһә ниндәй стресс организмды туплай, мобилизациялай). Һөҙөмтә шул уҡ: иммунитет нығына, һәләттәр арта.

Балалар әсә ҡарынында уҡ барыһын да аңлай, улар менән һөйләшегеҙ, уларҙы яратығыҙ.

Баланы буш имеҙлеккә өйрәтмәгеҙ, сөнки был ваҡытта мейе, уларҙың тәьҫире арҡаһында, "һүнә", тимәк, аҡыл һәләте үҫеше тотҡарлана. Бигерәк тә балаларҙы ҡулда тотҡанда буш имеҙлек бирмәгеҙ.

Баланы биләмәгеҙ - был быуындарҙың хәрәкәтсәнлеген кәметә, мускулдарҙың атрофияһына килтерә. Ҡайһы бер балалар даими илай. Сәбәбе - муйын дискыларының тайыуы, ҡаймығыуы. Сабыйҙарҙы ҡулығыҙға, хатта улар башын тотҡан хәлдә лә, һаҡ ҡына алығыҙ, йөҡләрға һалғанда ла һаҡ ҡына һалығыҙ.

Балаларҙы люстра йәки лампа аҫтына һалмағыҙ, яҡты нурға ҡарап, күҙен боҙоуы мөмкин.

Бала күсеү осорона тиклем әсәһенең аураһы менән туҡлана. Шуға күрә баланың карауаты ҡул һуҙымында ғына булырға - бала әсәһенең аураһында булырға тейеш. Әгәр әсәнең аураһы ҙур икән, карауатты алыҫҡараҡ та ҡуйырға мөмкин.

Балаларға әкиәт уҡыу ҙа бик файҙалы - ул логиканы, фекерләүҙе, киңлек тураһындағы уйҙарҙы, эске күреүҙе үҫтерә. Әгәр балаға аҡкош, ҡыҫала һәм суртан траһында уҡыйһығыҙ икән, уларҙа киңлектең өс ҡырлы булыуын аңлау барлыҡҡа килә, әгәр йомро икмәк тураһында һөйләйһегеҙ икән - түнәрәк, шар, әйләнеш һ.б. тураһында күҙаллауҙар тыуа.

Сүпрәле икмәк ашауҙан тыйылығыҙ - сүпрә таяҡсалары аминокислоталарҙы һәм файҙалы бактерияларҙы бөтөрә. Хәҙерге балалар йыһан энергияһы менән туҡлана - уларҙы көсләп ашатмағыҙ. Балаларға шишмә йәки сеансетарҙа зарядланған структуралы һыу эсерегеҙ - улар илаһи гармония һәм камиллыҡ тураһында мәғлүмәт йөрөтә.

Бигерәк тә имсәк имгән балаларға яҡшы һыу кәрәк. Ҡайһы бер ваҡыт әсәләр балаларға һыу эсерергә онота, шунан эс ҡатыу, кендек бүҫере барлыҡҡа килә (балалар көсәнә, ә уларҙың кендек тирәһендә мускулдары юҡ).

Һәр организм бик аҡыллы һәм һәр саҡ үҙенә нимә кәрәк икәнен әйтә, ә балалар үҙ организмын яҡшы тоя һәм уны аңларға һәләтле. Шуға күрә уларға үҙегеҙҙең тәжрибәгеҙҙе көсләп таҡмағыҙ.

Бер пациент әсә баланың ике урынлы һандарҙы хәтерҙән генә еңел ҡабатлауы тураһында һөйләнә. Шунан әсәһе уға көсләп ит ашата һәм баланың һәләте юғала.

Балаларҙың һәләтен асығыҙ. Мәҫәлән, уның ҡыйыш һыҙыҡ һыҙыуын һорағыҙ - шикләнмәгеҙ, ул бик матур ҡыйыш һыҙыҡ һыҙыр. Уны маҡтағыҙ, уның бик һәләтле икәнен әйтегеҙ!

Шулай итеп, һеҙ генетик программаға һалынған һәләттәрҙе асыу механизмын эшкә егәһегеҙ. Баланың үҙ-үҙенә ышаныуы бик мөһим.

Хәҙер бик һәләтле балалар тыуа. Уларҙың тирбәлеше бик юғары, биологиялары һәм ҡандары икенсе төрлө. Табиптар уларға бишенсе ҡан төркөмө ҡуя. Беҙ ҙә шул йүнәлештә үҙгәрәбеҙ.

Балаларығыҙҙың һүҙҙәренә ҡолаҡ һалығыҙ. Улар аҡыллы һүҙҙәр һөйләй. Мәҫәлән, алты йәшлек бер бала әсәһенә: "Әсәй, әрләшкән ваҡытыңда йылмай", - тип тәҡдим иткән.

Бала булып ҡалығыҙ - һоҡланығыҙ, яратығыҙ, ҡыуанығыҙ! Тормош матур!

**Рауфан МОРТАЗИН.**

ДИНИ КАЛЕНДАРЬ

# МӘҮЛИТ БАЙРАМЫ ЕТӘ



**Рабиғел-әүүәл айының 11-се көнөндә - 3 февралдә Мәүлит кисе, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең тыуған көнө.**

Был көндө Хоҙай Тәғәлә барлыҡ кешелеккә оло мәрхәмәт күрһәткән - һайлап алыныусы, яратыусы һәм яратылыусы, хәҡиҡәт юлына әйҙәүсе, кешеләр яҙмышы өсөн ихлас көйөүсе Бәйғәмбәребеҙҙе бүләк иткән.

Бәйғәмбәрлек төшөрөлгәндән һуң Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙенең тыуған көнөн Ҡөрьән-Кәрим уҡып, доғалар ҡылып, ураҙа тотоп, саҙаҡалар өләшеп үткәрер булған. "Был көн нимәһе менән мөһим һинә?" тип һорағастар, ул "Был көндә мин тыуғанмын һәм был көндә (ҡырҡ йылдан һуң) миңә Ҡөрьән төшөрөлдө", тип яуап бирер булған. Шуға ла Бәйғәмбәр был көндә Аллаһыға рәхмәт уҡып, Уның исемдәрен телгә алып, изге эштәр эшләп үткәргән.

Мәүлит-Нәби көнө әле лә беҙҙең өсөн изге һанала. Был көн бергәләп йыйылып, бөйөк Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) иҫкә алып, Ҡөрьән уҡып үткәрергә, Аллаһыға рәхмәт яуҙырырға бер сәбәп булып тора. Ҡөрьән-Кәримдә:"Аллаһ Үҙе лә, фәрештәләр ҙә Бәйғәмбәргә салауат әйтеп кенә тора. Эй, мөьминдәр! Һеҙ ҙә намаҙҙарҙа һәм доғаларҙа Бәйғәмбәргә салауат әйтеп, сәләм биреп тороғоҙ!" - тиелә.

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Ижадсы һеҙҙе ярата

Шулай итеп, даими рәүештә уникаль шәхес булыуығыҙҙы, Ижадсының һеҙҙе яратыуын, күҙгә күренмәҫ терәккә эйә булыуығыҙҙы үҙегеҙгә иҫегеҙгә төшөрөп торорға тейешһегеҙ. Шундай көндәлек иҫкә төшөрөп тороуҙар арҡаһында һеҙ иң яҡшы булыуығыҙҙы, аҡса эшләү тураһындағы илаһи идеяларҙың һеҙгә уң яҡ мейе ярымшарының үтенесе буйынса килеүен һәм тап ошо идеялар тормоштоң алдынғы позицияларында булырға яҙҙам итеүен нығыраҡ үҙләштерерһегеҙ. Ижадсының бөтөн нәмә хәленән килә һәм һеҙ Уның сикһеҙ аҡылына ышанығыҙ.

Һеҙ быны көн һайын ҡабатлай алаһығыҙ. Уны емешле идеяларға күсеү сараһы итеп файҙаланығыҙ. Бынан тыш, һеҙ көн һайын шәхси аффирмацияларығыҙҙы ҡабатлай алаһығыҙ. Мәҫәлән, ошондайҙарҙы:

- Һәр саҡ, ҡуҙҙәремде йомоп, өс тапҡыр тәрән итеп тын алып, көсөргәнештән тәрән арыныуға өлгәшәм. Минең яңы идеяларым барлыҡҡа килә. Мин проблемаларҙы хәл итәм. Юғары аң минең аныма яуаптар һәм хәл итеү юлдарын табырға ярҙам итә. Шулай булһын.

Әгәр һеҙҙең бөгөнгә аныҡ ғәмәлдәр эшләү программағыҙ бар икән, шундай ҡуйылыштан һуң тиҙ генә уларға күсегеҙ. Ҡуйылышты үтәп һәм программалаштырыуҙы тамамлап, һеҙ шулай тип әйтә алаһығыҙ:

- Мин беләм, минең аңым Юғары аңдың көүҙәләнеше. Мин уның ижади көсөнә ышанам. Мин, хатта үҙем уны һиҙмәгәндә лә, һәр саҡ алға барам. Мин ыңғай һөҙөмтәләр көтәм.

Был ҡуйылыштарҙың мәғәнәһе нимәлә? Нигеҙҙә, улар: "Мин хәл-торош алдында ихтыярһыҙ ҡурсаҡ түгел. Мин - хәл-торошто булдырыусы", - ти. Бынан тыш, улар: "Мин көсөргәнештән арынғанмын һәм үҙемә Аллаһы Тәғәләне индерәм", - ти. Һеҙ Ижадсының тормошоғоҙҙа көн һайын булып торған миһырбанлығын тирә-яҡтағыларға аңлатыу ни тиклем ауыр булыуын аңларһығыҙ. Бәләкәй генә ысын мөғжизә тураһында һөйләһәгеҙ ҙә: "Тап килеү", - тиер күптәр һәм инъбаштарын ғына йыйырып ҡуйыр. Әгәр һеҙ ошо тап килеү - ул Иждасының ярҙамы, тип аңлата башлаһағыҙ, әңгәмәсегеҙ һүҙҙе сәйәсәтҡә йәки һауа торошона күсерер.

Бер ниндәй һүҙҙәр ҙә "теге яҡ"тың ярҙамын яҙып аңлата алмай. Уның тураһында һөйләгәндә һеҙ бары тик энергияғыҙҙы ғына бушҡа әрәм итәһегеҙ. Киләсәгегеҙҙе үҙ һүҙҙәрегеҙ менән үҙгәртәһегеҙ. Әммә һеҙ, хатта иң изге ниәттәр менән етәкселек итһәгеҙ ҙә, бер нәмәгә лә өлгәшә алмаясаҡһығыҙ.

"Теге яҡ"тан өҙлөкһөҙ ярҙам менән тәьмин иткән өс талап бар:

- Аңығыҙҙы был донъяны көндән-көн яҡшыртыу өсөн файҙаланығыҙ
- Бындай мәсьәләләр буйынса теләһә кем, хатта ғаилә ағзалары менән фекер алышыуҙан тыйылығыҙ, ләкин уларға ла үҙегеҙ эшләгәнде эшләргә тәҡдим итегеҙ.
- Көн һайын доғалар, ҡуйылыштар һәм мөхәббәт ярҙамында Ижадсы менән бәйләнешегеҙҙе нығытығыҙ.

**Роберт СТОУН.**



## 30 ЯНВАРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.40 "Право на защиту"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Понять. Простить"
14.00 Другие новости
14.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
17.05 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым"
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Жуков", 5-я серия
22.30 "Доктор вирус"
23.30 "Познер"
00.30 Ночные новости
00.50 "Тайная жизнь собак". Док. фильм
01.45, 03.05 "Психоз". Триллер
03.00 Новости
03.50 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры"
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Все к лучшему", 258-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья. Продолжение", 232-я серия
17.55 "Хозяйка моей судьбы", 21-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Семейный детектив", 12-я и 13-я серии
22.50 "Россия от первого лица"
00.20 "Вести+"
00.40 "Профилактика"
01.55 "Чак-2"
04.30 "Городок. Дайджест"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Супруги". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "ППС". "Юморист", "Голый". Сериал
21.30 "Зверобой-3". Криминальный сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Главная дорога"
01.45 "Центр помощи "Анастасия"
02.35 "В зоне особого риска"
03.10 "Молодые и злые". Сериал
05.05 "2,5 человека". Сериал

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**10.00 "Новости недели"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Городок АЮЯ"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 23.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Новости недели"**
**12.15, 17.45 "Полезные новости"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Бахетнама"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.15 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Царь горы"**
**16.00 "Бауырхак"**
**16.15 "Шатлык йыры"**
**16.45 "Секреты глубин"**
**18.00 "Еду я в деревню"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
